✓ ***Башҡа милләт мәҙәниәте һәм цивилизацияһы менән "никахҡа" инеп, үҙенә яҡшы киләсәк тәьмин итәм тип уйлаған йәмғиәттәр бер ағастың ботағына икенсе ағастың емештәрен бәйләп ҡуйған кеүек көлкөлө һәм сәйер күренеште күҙ алдына баҫтыра.***

***Фәтхула ГӨЛӨН,***
***төрөк шағиры һәм мәғрифәтсеһе.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru    2002 йылдан башлап сыға    Һатыуҙа хаҡы ирекле    №3 (369)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Заман талабы,**
йәки Һәләтле бала айырым бағыуға мохтаж **5**



**Әрмеме был...**
әллә холоҡ төҙәтеү урынымы? **6**



**Иҫәптә лә, һанда ла булайыҡ,**
йәки Статистика хеҙмәте халыҡ иҫәбен алыуға әҙерләнә **8-9**



**Горилла һындырған мылтыҡ -**
был кешелеккә иҫкәртеү түгелме? **13**



**14 ТВ-программа**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ӨҪТӨНЛӨК КӨҪӘП ТҮГЕЛ...

## яратҡан өсөн өйрән туған телде

**Ҡышҡы каникулдар мәктәп уҡыусылары өсөн ял итеү ваҡыты ғына түгел, ә һынау мәле лә, сөнки тап ошо көндәрҙә төрлө фәндәр буйынса олимпиадалар үтә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиаданың республика этабы ла каникулдар ваҡытына тура килде. Сәнгел һыуыҡтар ҡурҡытманы сәсән телле балаларҙы, быйылғы йомғаҡлау турына республиканың ғына түгел, күрше Силәбе һәм Ырымбур өлкәләре мәктәптәренән дә барлығы 300-ҙән ашыу уҡыусы йыйылды.**

(Дауамы 4-се биттә).



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҮҘ ӨЙӨНДӨ...

## төрмә итә күрмә!

**Рәсәйҙә элек-электән киң таралып киткән бер әйтем бар: "Төрмәнән һәм хәйерсе тоҡсайынан азатмын, тип уйлай күрмә". Һай, булды бит замандар - тегеһененң дә, быныһының да һис бер кәрәге ҡалмаясаҡ йәмғиәт төҙөйәсәкбеҙ, тип хыял ҡорған ваҡыттар... Кем уйлаған инде, бер саҡ енәйәтселек алҡымыбыҙҙан алыр, хәйерселек буҫағабыҙ аша атлар, тип.**

Ярай әле, һуңғы йылдарҙа һоранып көн күреүселәр артыҡ күҙгә салынмай башланы, әммә енәйәтселек менән көрәш ҡыҙа барған һайын, енәйәт ҡылыусылары ла арта бара бит, ҡәһәрең. Төрмәләрҙә уларға урын да етмәй икән, ә яңыларын төҙөргә көрсөк ҡамасаулай. 2009 йылдың 1 ноябренә холоҡ төҙәтеү урындарында, йәғни иркенән мәхрүм ителгәндәр өсөн тәғәйенләнгән учреждениеларҙа барлығы 875,8 мең кеше тотолған. Тикшереү изоляторҙарында ғына ла 135 меңдән ашыу кеше хоҡуҡ һаҡлаусыларҙың яҙмыш дәфтәренә ни яҙғанын көтә бөгөн. Уйлап ҡараһаң, кемдәр генә юҡ унда: енәйәтсе-рецидивистар, кеше малын һуйып ашаусылар, яңылыштан авария эшләүселәр, бюджет аҡсаһын туҙҙырыусылар, кеҫә телефонын урлаусылар, эскән баштан бер-береһен туҡмаусылар, туҙға яҙмаған листовкалар баҫтырып сығарған "революционер-экстремистар", бурысҡа алған аҡсаларын түләргә теләмәүселәр...

Шулай ҙа Рәсәй юристары төрмә-колонияларға эләгеүселәр һанын йылына 100 мең кешегә тиклем ҡыҫҡарта алыу ысулын уйлап тапты, һәм был яңылыҡ 2010 йылдың 10 ғинуарынан закон көсөнә индерелде. Яңы йыл алдынан Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев Рәсәйҙең Енәйәт эштәре кодексына һәм Енәйәти-башҡарма кодексына ярашлы яза биреүҙең иректе сикләү төрө хаҡындағы положениеларын ғәмәлгә ашырыу менән бәйле айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү хаҡындағы Федераль законға ҡул ҡуйҙы.

Был юридик яңылыҡ ниҙән ғибәрәт? Беҙҙә бар төрлө хоҡуҡ боҙоуҙар, хатта йәмғиәт өсөн артыҡ хәүеф тыуҙырмаған ваҡ енәйәт эштәре өсөн дә гражданды иркенән мәхрүм итеп, халыҡ теле менән әйткәндә, "артыҡ алыҫ булмаған" ерҙәргә ебәреү киң ҡолас алған. Ә Европала һәм донъяның башҡа цивилизациялы илдәрендә тәртип, закон йәиһә хоҡуҡ боҙоусыны һәр осраҡта ла төрмәгә йә колонияға бикләргә тырышмайҙар. Рәсәй Европанан кәмме ни? Яңы законға ярашлы, беҙҙә лә шулай буласаҡ. Суд ҡарары буйынса иркен сикләүгә хөкөм ителгән кешене бына нимә көтә (Әйткәндәй, бындай яза төрөнә "домашний арест", йәғни үҙ өйөндә йәшәп, билдәле кимәлдә иркенде сикләү нормаларын үтәргә дусар ителеү ҙә инә).

(Дауамы 2-се биттә).

***✓ Иркенән мәхрүм ителгәндәргә төрмәләрҙә урын етмәй башланы, ахыры. Был үҙгәрештәрҙең ил кимәлендә тиҙ арала ниндәйҙер ҙур һөҙөмтәләргә килтереүенә өмөт итмәйем.***



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҮҘ ӨЙӨНДӘ...

## төрмә итә күрмә!

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

Төрлө ваҡ енәйәттәр, яла яғыу, урлашыу осраҡтары иҫбатлана ҡалһа, хөкөм ителеүсе бөтөнләйгә иркенән мәхрүм ителмәй, өйөндә йәшәй, эшләй, ял итә, ғаиләһенән айырылмай. Әммә ул тәүлектең суд билдәләгән ваҡытында өйөндә генә торорға мәжбүр ителә, уға үҙе йәшәгән ауыл йәки ҡаланан ситкә сығыу, рөхсәтһеҙ йәшәү урынын, эшен алмаштырыу, күмәк ял итеү урындарына йөрөү, төрлө ижтимағи-сәйәси сараларҙа ҡатнашыу тыйыла. Суд ҡарары буйынса башҡа төрлө сикләүҙәр ҙә тәғәйенләнеү мөмкин. Бындай язаның ике айҙан 4 йылға тиклем бирелеүе мөмкин. Яза ваҡыты бөткәнсе хөкөм ителеүсе айына берҙән дүрт тапҡырға тиклем махсус күҙәтеү органына барып, теркәлеү үтергә тейеш. Яза режимын даими боҙоусыны суд яңы ҡарар нигеҙендә иркенән мәхрүм итеп, төрмәгә ебәрә ала. Яза алыусының режимды үтәүен тикшереү өсөн аудиовизуаль, электрон йәиһә башҡа төрлө техник саралар ҡулланылыуы мөмкин. Хөкөм ителеүсенең ҡулына йә аяғына махсус электрон беләҙек кейҙерһәләр, күҙәтеүсе органдарға уның ҡайҙалығы теләгән ваҡытта билдәле буласаҡ. Шулай итеп, ваҡ енәйәтселәргә үҙ өйө лә "төрмә" ролен үтәй башлаясаҡ. Был яңы сара йәмғиәттең әхлаҡи-хоҡуҡи торошона ниндәйҙер үҙгәрештәр индерә алырмы-юҡмы, ваҡыт күрһәтер, тип өмөтләнәйек.



**Вәли ИҘРИСОВ.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Әхиәт ҒӘЙЕТБАЕВ, балалар музыка мәктәбе директоры:** Совет осоронда бәғзе берәүҙең берәй төрлө хоҡуҡ боҙоуы хаҡында шик тыуһа, тоталар ҙа тикшереү изоляторына ябалар ине. Хәҙер ҙә тикшереү аҫтына эләккән кешене һаҡ аҫтына алыу өҫтөнлөк итә. Ә закон буйынса кешенең ғәйебен суд ҡына билдәләй ала бит. Шул арҡала хатта бер ғәйепһеҙ кешеләр ҙә айҙар буйына ысын енәйәтселәр араһында тотола. Ә аңдары ғына түгел, быуындары ла нығынып етмәгән йәштәрҙең, ата енәйәтселәр йоғонтоһона эләгеп, криминал юлды һайлауы үҙе бер проблема түгелме ни? Бер ағайҙы ферманан 3 тоҡ мал аҙығы алып ҡайтҡаны өсөн 3 йылға иркенән мәхрүм иткәйнеләр, сөнки тикшереү актында 3 т. тип яҙылғанды судья 3 тонна тип уйлаған. Ә был кеше төрмәнән ныҡ үҙгәреп, холҡо боҙолоп ҡайтты. Судьяны айырым кеше яҙмышы артыҡ борсомай бит: бур барыбер бур инде, алһын әйҙә тейешле язаһын, тиҙәр ине. Ә хәҙер яңы закон буйынса ваҡ енәйәт ҡылған өсөн төрмәгә ултыртыу мотлаҡ түгел, ә шикле кешене судҡа тиклем ирке сикләнгән рәүештә үҙ өйөндә тотоу мөмкинлеге лә инҡар ителмәйәсәк. Европа илдәрендә бындай юридик нормалар күптән ҡулланыла, һәм ошо яңылыҡты юриспруденция өлкәһен гуманлаштырыу сараһы рәүешендә лә ҡарап була.

**Закирйән ӘМИНЕВ, отставкалағы прокурор:** Был яңылыҡты ишеткәс, башҡа килгән беренсе уй: иркенән мәхрүм ителгәндәргә төрмәләрҙә урын етмәй башланы, ахыры. Был үҙгәрештәрҙең ил кимәлендә тиҙ арала ниндәйҙер ҙур һөҙөмтәләргә килтереүенә өмөт итмәйем. Совет дәүерендә лә ошондай нормалар бар ине, тора-бара уларҙы ҡулланмай башланылар. Элек тә административ юл менән ҡайһы бер кешеләрҙең иркен сикләү булды. Милиция хеҙмәткәрҙәре ундайҙарҙы күҙәтеү аҫтына ала ине, әммә күп осраҡта ниндәйҙер ғәйептәрен табып, иркенән мәхрүм итеү сараһын ҡулландылар. Бур барыбер урлашмайынса йәшәй алмаясаҡ, уларҙы иректә тотһаң, криминаль статистика күрһәткестәре насараясаҡ, тигән фекер өҫтөнлөк итте. Халыҡтың менталитеты үҙгәрмәйенсә, дөйөм мәҙәни кимәле күтәрелмәйенсә, ошондай йомшағыраҡ юридик сикләүҙәр менән генә ил күләмендә хоҡуҡ боҙоуҙарҙы кәметеп булмаясаҡ. Әлбиттә, электрон беләҙек кеүек техник сараларҙы ҡулланыуҙы хупларға кәрәк, сөнки был енәйәт ҡылырға әүәҫ кешеләрҙе ныҡлы күҙәтеү аҫтында тотоу мөмкинлеген бирә.

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# АТАМАЛАР - УРЫҪСА...

## есемебеҙ - башҡортса

**Баймаҡтан Йылайыр районына ҡараған Юлдыбай ауылы аша Хәйбулла яғына барыр булһаң, ошо яҡтың мәҙәниәт кимәле юлдарҙағы яҙыуҙарҙа ла бермә-бер сағылыш таба төҫлө.**

Баймаҡ районының Ишмырҙа ауылын үткәс, Баймаҡ-Йылайыр райондарының сигенә етәһең. Сәсәндәр төйәге Баймаҡ яғынан һине ҙур хәрефтәр менән яҙылған "Баймакский район. Счастливого пути!" тигән яҙыу ҡаршы ала. Күпмелер ара үткәс, "Зилаирский район. Добро пожаловать!" тигән яҙыу менән данлыҡлы Ишмуллалар төйәге ҡаршылар. Был тирәлә башҡортса бер ниндәй ҙә яҙыу юҡ, һәр хәлдә, бында үҙенде Башҡортостан, башҡорт ерендә итеп тоймайһың, ҡайҙалыр Псков, Новгород яҡтарында йөрөгәндәй хис итәһең.

Ярар, хуш, артабан киттек Хәйбулла яғына. Йылайыр районының Сәлим ауылын үткәс, Хәйбулла районы башлана. Унда һине бик матур итеп русса һәм башҡортса яҙылған "Хәйбулла районы" һәм "Хайбуллинский район" тигән яҙыуҙар һәм тәбрикләү һүҙҙәре ҡаршы алыр. Нимә килеп сыға: Урал аръяғында Башҡортостандың иң сигендә ятҡан Хәйбуллаға барып еткәс кенә Башҡортостан башланған кеүек бит был.

Быларҙы нимә өсөн яҙам һуң? Баймаҡта һәм Йылайырҙа" Башҡортостан Республикаһы телдәре тураһында"ғы Законды үтәлешен тикшергән комиссиялар даими эшләп килә. Төрлө ойошма, предприятие атамаларындағы хата ебәреүҙә ғәйепләләрҙе гәзит битендә тәнҡитләп яҙып тороуҙарынан шулай тип аңлайым. Бәлки, штраф та һалаларҙыр, минә ул яғы ҡараңғы. Хаталар күпселек осраҡта ваҡ киоскылар, ауылдарҙағы магазиндар алтаҡталары тирәһендә була, тимәк, ғәйепләләре лә шул тирәлә эшләгәндәрҙер инде. Ике район сигендәге ат башындай итеп яҙылған яҙыуҙарҙы комиссия ниңәләр күрмәй. Әйткәндәй, Баймаҡ совхозына ингәндә лә шул уҡ хәл.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Беҙ "баймаҡбыҙ", тип маҡтанырға яратһаҡ та, милләтебеҙҙең һәм республикабыҙҙың йөҙөн билдәләрлек ошондай ғына мәсьәләләргә бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ. Был ваҡ мәсьәлә түгел. Башҡалар беҙҙең баймаҡлыҡты түшебеҙгә ҡарап белергә була, тип мәрәкәләй. Түшебеҙ күк булыу мәнәнме ни, маңлайыбыҙға исемебеҙ башҡа телдә яҙып ҡуйылғас.**

**Икенсе ЭТҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы.**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# УРЫҪСА ҺҮГЕНЕҮГӘ - 450 ЙЫЛ

**ҺОРАУ: Ни өсөн башҡорт кешеһе урыҫса һүгенә?**

- Беҙҙә һәр бер түрә, етәксе үҙенең интеллигент, юғары мәҙәниәтле булыуын телмәрендә урыҫса һүҙҙәр ҡушып һөйләшеп күрһәтергә тырышҡан замандар ҙа булды. Шундай көләмәс тә бар: "Бер кеше: "Значит"тың яңы ғына сыҡҡан заманы ине, шуға күрә "значит"тан ғына һалдырам...", тигән, имеш. Ә урыҫса һүгенеүгә килгәндә инде, уның юбилейын да билдәләргә була хәҙер - 450 йыл. Урыҫтың бер генә ижектән торған күп мәғәнәгә эйә бер һүҙе бар. Уның менән күплекте, ҙурлыҡты белдерергә, кешене ҡайҙалыр оҙатырға, ҡаршы алырға, тыйырға, маҡтарға, кәмһетергә, ҡурҡытырға, һоҡланырға һәм башҡа төрлө ғәмәл эшләтергә була. Махсус тикшереү үткәреүсе Федорук тигән апай ул һүҙҙең йөҙҙәрсә мәғәнә аңлатыуын иҫбат иткән, тиҙәр. Миненсә, урыҫса һүгенеүҙе Рус батшаһы ғәскәрендә хәрби походтарҙа булған яугирҙәр алып ҡайтҡандыр.

Элегерәк урыҫса һүгенеүсе башҡорттар был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дә аңламаған, аңлай башлағанда иһә һуң булған, был алама ғәҙәткә әйләнеп өлгөргән булған. Унан һуң, башҡорт урыҫса һүгенә икән, бында уның үҙ теләнең сафлығын һаҡларға ынтылыуын да инҡар итеп булмай. Башҡалар нисек уйлай икән һуң?

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Башҡортостан Республикаһында 2010 йылды Республика йылы тип иғлан итеү тураһында, шулай уҡ Рәсәй Федерацияһында Уҡытыусы йылы сиктәрендә Башҡортостан Республикаһында саралар үткәреү тураһында Указдар ҡабул итте.

✓Рәсәйҙә иғлан ителгән Уҡытыусы йылының тәүге белем усағы Башҡортостанда асылды. Ошо көндәрҙә Ғафури районының Красноусол ауылында 480 бала белем аласаҡ 1-се мәктәптең яңы бинаһын асыу тантанаһы булып үтте. Был тантанала Башҡортостан Республикаһы Президенты ла ҡатнашты..

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты "Башҡортостан Республикаһының дәүләт граждан хеҙмәте вазифаларын биләүгә дәғүә итеүсе граждандар һәм Башҡортостан Республикаһы дәүләт граждан хеҙмәткәрҙәре тарафынан килем, мөлкәт һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләр хаҡында мәғлүмәт биреү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓Германияның баш ҡалаһы Берлинда 15 ғинуарҙан үтәсәк "Йәшел аҙна-2010" халыҡ-ара агросәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы данын ике предприятие - Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәге, "Башспирт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте яҡлаясаҡ.

✓Торлаҡты бушлай хосусилаштырыу 1 мартта тамамлана. Күрһәтелгән ваҡытҡа тиклем ғариза биреп, килешеү төҙөп өлгөрөү мөһим. Милекте Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында уны һуңынан да теркәтергә мөмкин буласаҡ.

✓Бөгөн халыҡты вирусҡа ҡаршы дарыуҙар менән тәьмин итеү күпкә яҡшырған. Былтыр ноябрь айында дарыуҙарға хаҡ арттырыу тураһындағы ялыуҙарҙан һуң, "Росздравнадзор"ҙың БР буйынса идаралығы БР һәм Өфө прокуратураһы хеҙмәткәрҙәре менән берлектә һигеҙ фармацевтик ойошмала тикшереү үткәрә һәм бер ниндәй ҙә закон боҙоуҙар тапмай.

***✓ Ил етәкселәре банкирҙарҙы, финанс фирмалары бостарын дәүләт аҡсаһы ярҙамында банкротлыҡтан ҡурсып ҡалды. Ә донъя көрсөгөнөң төп сәбәптәренең береһе - самаһыҙ байығандарҙың ҡомһоҙлоғо түгел инеме?***

*ИШАРА*

# ЯРЛЫ БАЙҘЫ ЯРЛЫҠАРМЫ?

## Йәки ас күңелен туҡ белмәй

**Беҙҙең быуын мәктәптә уҡыған осорҙа кешелектең ырыу-ҡәбиләләргә берләшеп йәшәгән архаик ижтимағи ҡоролошон тәүтормош коммунизмы, тип атай инеләр. Һәм бына ни өсөн: һәр ҡәбилә ағзаһы барыһы өсөн дә уртаҡ көнитмештә үҙ көсөнән килгәндең барыһын да эшләп, тапҡан-йыйғаны менән бүлешеп йәшәр булған. Бәлки, ошо "беренсел коммунизм"да йәшәгән әҙәм балалары күп ваҡытта аслы-туҡлы көн иткәндер, әммә үҙ затыңа ҡарата мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле булыу ҙа ошо саҡта яралғандыр. Шулай булмаһа, кешеләр йәмғиәте үҙенең сабый сағында уҡ юҡҡа сыҡҡан булыр ине. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, ошо ярым аңлы тәү бабалар йәшәгән дәүер хәҙергегә ҡарағанда күпкә ғәҙелерәк булып, дөйөм кешелек йәшәйешенең ныҡлы тәү нигеҙен булдырған да инде.**

### Байлыҡ - бәлә-ҡаза сығанағы

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кешелек барлыҡҡа килеп, күпмелер дәүерҙәр үтеүгә, ул яңылыш юлдан китә. Башҡалар иҫәбенә бай һәм мул тормошта йәшәү идеяһы өҫтөнлөк алып, йәмғиәт тигеҙ булмаған ике ҡатламға - бай һәм ярлыларға бүленә. Юғары ҡатлам кешеләре матди байлыҡтарға хужа була алыуын үҙҙәренә ҡөҙрәтле Илаһ тарафынан бирелгән өҫтөнлөк сифатында ҡабул итә башлай. Әммә тәбиғәт байлыҡтары, мал-тыуар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, биҙәнеү әйберҙәре һәм башҡа бихисап матди ҡиммәттәр үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәй, уларға бик күп хеҙмәтсән халыҡтың ҡул һәм аҡыл көсө һалына. Дөрөҫөн әйткәндә, кемдер етештерә, ә кемдер ошо етештереүселәр хеҙмәтенең һөҙөмтәһен үҙләштерә - бына ошо универсаль байығыу механизмы, төрлө дәүерҙәрҙә төрлө форма алып, хәҙерге замандарға тиклем килеп еткән. Башҡа ҡәүемдәр туплаған байлыҡты үҙләштереп, уларҙы мәңгелек ҡол сифатында файҙаланыу ниәтендә кешеләр иң ҡырағай саралар ҙан да баш тартмаған: кешелек тарихын әҙәми заттарҙың меңәрләгән һуғыштарҙа бер-береһен ҡырыу тарихы, тип атап булыр ине. XX быуатты башынан аҙағына тиклем тетрәтеп, тиҫтәләгән миллион бер ғәйепһеҙ кешенең ғәзиз ғүмерен алған донъя һуғыштарынан да фажиғәлерәк башҡа ваҡиғалар юҡтыр. Ул тиклем халыҡ ниндәй маҡсатта, ниндәй аждаһаға ҡорбан ителгән һуң? Был һорауға бер генә яуап бар: заман телендә капитал тип аталған байлыҡҡа сикһеҙ ынтылыу ҡәҙимге кешеләрҙән дә ҡан эскес йәлләд яһай ала икән. Иң аянысл ыһы ла шул: ниндәй генә сәбәптәр менән аҡланмаһын, ер йөҙөндә байлыҡ өсөн алып барылған һуғыштар әле лә дауам итә.

### Маркс һабаҡтары иҫкергәнме?

XIX быуаттың бөйөк фекер эйәһе Карл Марксты хәҙерге быуын сәйәсмәндәре кешелекте яңылыш юлға баҫырға өндәүсе бер утопист сифатында ғына күрһәтергә әүәҫ. Гайдар, Явлинский, Чубайс кеүек либераль идеологтар уны тарих сүплегенә сығарып ташларға саҡырҙы. Тик шуныһы ғәжәп: XX быуат аҙағында Интернет селтәре аша донъя кимәлендә ойошторолған һорау алыу һөҙөмтәһендә Карл Маркс "2-се мең йыллыҡ кешеһе" тип иғлан ителә. Уға Ньютон, Дарвин, Эйнштейнға ҡарағанда байтаҡҡа күберәк тауыш бирелә. АҠШ конгресы китапханаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, донъяла фәнни китаптар һаны буйынса Маркс ҡа тиңләшерлек башҡа бер шәхес тә юҡ икән. Кешелеккә йоғонтоһо буйынса Маркстың ғилми мираҫы хатта Иисус Христос тәғлимәтенән дә өҫтөнөрәк тип табыла. Һәм быңдай һығымта өсөн ерлек бар: донъяға капитал серен аса алған бөйөк фекер эйәһенең ҡараштары асылына ваҡытында төшөнә алған цивилизациялы ил башлыҡтары социаль тигеҙһеҙлекте бөтөрөү, кеше хеҙмәтен сиктән тыш эксплуатациялауҙы туҡтатыу маҡсатында капитализм ҡоролошон көйләүгә бар көсөн һала. Тап шуның өсөн дә социализм, йәғни социаль дәүләт төҙөү мөмкинлеге Көнбайыштың капиталистик илдәрендә бойомға ашырыла. Бәлки, Маркстың бөйөк "Капитал"ындағы ошо фекер генә лә капитал аждаһаһын бар граждандарҙың йәшәйеш ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә алыусы йомарт финанс аллаһына әйләндереүгә булышлыҡ иткәндер: "Капитал тәбиғи ҡурҡаҡлығы менән айырылып тора һәм шау-шыуҙан, орош тан ситтә ҡалырға тырыша. Был раҫ, әммә бөтә дөрөҫлөк бында ғына түгел. Тәбиғәт бушлыҡтан ҡурҡҡан кеүек, капитал килем юҡлыҡтан йәки уның ныҡ бәләкәй булыуынан ҡурҡа. Әммә етерлек килем бар икән, капитал ҡыйыуыраҡ була башлай. 10 процент килем тәьмин итегеҙ, һәм капитал теләһә ниндәй ҡулланыуға риза буласаҡ, 20 процент булғанда ул теремекләнеп китә, 50 процент булғанда үҙ башына үҙе етергә әҙер, 100 процентҡа еткәндә бөтә кешелек ҡанундарын юҡҡа сығара, 300 процент булғанда аҫып ҡуйылыу ҡурҡынысы янаған хәлдә лә ул баҙнат итмәгән енәйәт ҡалмай. Әгәр шау-шыу һәм орош килем килтерә икән, капитал тегенеһенә лә, быныһына ла булышлыҡ итәсәк". Бына бит ул нисек: гениаль экономист бынан 150 йыл әүәл тап бөгөнгө Рәсәй ысынбарлығын ҡылыҡһырлаған кеүек тойола. Ни хәл итәһең, әгәр беҙ тарих әленән-әле ҡабатланып тороп та, уның әсе һабаҡтарын һанға һуҡмаған илдә йәшәгәс.

Маркстың коммунистик идеяларын үҙ маҡсаттарына ярашлы ғәмәлгә ашырырға теләп, Рәсәй большевиктары ла ысынбарлыҡта дәүләт капитализмының тоталитар формаһын урынлаштырғайны бит. Партия гимны сифатында йөрөгән "Интернационал"да "Бөтә көсләү донъяһын емерербеҙ", тип йырланһа ла, ябай хеҙмәтсәндәрҙе шәхси милекселек шарттарында эксплуатациялау сәйәсәте дәүләт көсләү системаһы эшмәкәрлеге менән алыштырыла. Ғөмүмән, кешене уның хеҙмәт емештәренән мәхрүм итеү буйынса совет системаһына етеүсе башҡа бер ҡоролошто ла күҙ алдына килтереп булмай. "Социалистик" капитал үҙенә тиклемгеһенән дә ҡомһоҙораҡ һәм яуызыраҡ булып сыҡты. "Яңы тормош" төҙөү хаҡына ҡорбан ителгән миллиондарса ғәйепһеҙ кешеләрҙе иҫәпкә алһаң, марксизм тәғлимәтенә РКП(б)-КПСС етәкселеге тарафынан килтерелгән зыянды бер ниндәй изге маҡсат менән аҡлап булмаясаҡ.

### Астың асыуы яман…

Мәрхүм атайымдың мохтажлыҡ, ярлылыҡ һәм шәфҡәтһеҙлек менән тулы бала сағы хаҡында әсенеп һөйләгәндәре иҫкә төшә. 10 ғына йәшлек сағында атаһы донъя ҡуйғас, ауыл малдарын көтөп, тамаҡ аҫырарға мәжбүр була. Бик ямғырлы һәм һалҡын көндәрҙең береһендә, өҫ-башы һыуланыуҙан тамам өшөп-ҡалтырап бөткәс, көтөүҙе ғәҙәттәгенән иртәрәк алып ҡайтырға мәжбүр була. Тап ошо көндә ул сират буйынса тәғәмләнергә ауыл байына бара. Бай өйөнөң ишек тупһаһында күпме көтөп ултырһа ла, уға ризыҡ алып сығыусы булмай. Бер мәл, аҡрын ғына баҫып, хужа үҙе пайҙә була ҡаршыһында. "Мулла, кем, Миңлеәхмәт, һин ни тип килдең бында? Бөгөн ашарлыҡ эшләмәнең бит, ана, малдар ас ҡайтҡас, һиңә лә шул хәжәт", - ти ул ас үҫмергә. "Асыҡҡандан түгел, ғәрлегемдән, ошо донъяның минең кеүек етемдәргә шулай ҙа уҫал һәм аяуһыҙ булыуынан үкһеп-үкһеп иланым шул саҡта", - тип хәтерләр ине атайым үҙенең бәхетһеҙ бала сағын. Бына минең алдымда Ваҡытлы Хөкүмәт тарафынан 1917 йылда уҙғарылған ауыл хужалығын иҫәпкә алыу материалдары ята. Ҡыҙыҡһынып ҡарайым: атайым күңеленә ғүмере буйына онотолмаҫлыҡ әрнеү һалған Иҙрис ауылы байының 28 аты, 24 һыйыр малы, 55 һарыҡ-кәзәһе, 50 баш умартаһы булған! Һәм бына ошо ябай ауыл кешеһе тормошоноң бер эпизодынан ғына ла быуаттан-быуатҡа аманат итеп тапшырырлыҡ фәһем алырға була: бай ҡатлам кешеләренең шәфҡәтһеҙлеге теге йәки был сәбәп арҡаһында етешһеҙ тормошта йәшәгән ярлы-ябағаның йөрәгендә уларға ҡарата нәфрәт осҡонон ҡабындыра, ә шул осҡондарҙан ҡабынған инҡилаб ялҡынында миллионлаған кешенең ҡорбан булыуына Ватаныбыҙ тарихы үҙе шаһит.

### Донъя көрсөгө ни хаҡында киҫәтә?

Тарих беҙҙең эра тип йөрөтөлгән ваҡыт үлсәменең 3-сө мең йыллыҡ йомғағын да һүтә башланы. Цивилизация төшөнсәһе бөгөн бар ҡитғаларға берҙәй үтеп инһә лә, беҙ барыбер ярлылар һәм байҙарға бүленгән донъяла йәшәүебеҙҙе дауам итәбеҙ. Һуңғы ваҡытта бөтә донъя иҡтисад-финанс көрсөгө шарттарында ярлылар һаны арта бара, был хәл үҙе үк, бигерәк тә тотороҡһоҙ Рәсәйҙә, хәүеф тыуҙырмай ҡалмай. Ил етәкселәре банкирҙарҙы, финанс фирмалары бостарын, миллиондарса доллар баһаланған милек хужаларын дәүләт аҡсаһы ярҙамында банкротлыҡтан ҡурсып ҡалды. Ә донъя көрсөгөнөң төп сәбәптәренең береһе - самаһыҙ байығандарҙың иҫ китерлек ҡомһоҙлоғо түгел инеме ни? Ә байҙарға ярлы-фәҡир ҡайғыһы төштән кире: улар ҡәҙимгесә типтереп йәшәүен дауам итә. Париждағы Француз иҡтисади конъюнктура институты президенты, иҡтисад профессоры Жан-Поль Фитусси байҙар эгоизмы хаҡында бына нимә ти: "Һалым түләүселәр иҫәбенә ҡотҡарылған финанс донъяһы кризисҡа тиклем нисек булһа, һаман шул рәүешле эшләүен дауам итергә теләй. Яҙмыш ҡуласаһы ыңғай әйләнгәндәр үҙҙәренең йәмғиәт алдында бурыслы булыуын тоймай". Ғалим финанс-капитал донъяһында кемдәрҙеңдер башҡаларҙан ун, йөҙ йәки мең тапҡыр күберәк килем алыуына ҡоролған сәйәси-иҡтисади системаның тотороҡһоҙ булыуын бай ҡатламдар өсөн бер ниндәй ҙә әхлаҡи кәртәләр ҡалмауында күрә. Кисәңге, көрсөккә тиклемге финанс донъяһының бер нисек тә үҙгәртелмәйенсә ҡайтанан тергеҙелеүендә бик ҙур хәүеф бар, тигән һығымта эшләй күренекле иҡтисад белгесе. Ярлылар түҙемлегенең дә ахыр сиккә етеүе мөмкин бит: әгәр тәүгеһенән дә яманыраҡ көрсөк ҡабатлана ҡалһа, улар яңынан "Интернационал"ды йырлай башламаҫ, тимәгеҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Башҡортостан" киностудияһы Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романы буйынса тулы метражлы фильм төшөрөү өсөн киносценарийҙарға конкурс иғлан итте. Ҡатнашыусыларға талап: конкурс эштәре рус йәки башҡорт телендәге сценарий тексынан, синопсистан һәм авторҙың ҡыҫҡаса автобиографияһынан торорға тейеш. Эштәр 1 мартҡа тиклем ҡабул ителә, апрелдә конкурсҡа йомғаҡ яһала.

✓РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Рәсәй Ҡатын-ҡыҙҙар союзы етәксеһе Екатерина Лахова яңы йыл каникулдарында Янғантау шифаханаһында ял иткән һәм БР Ҡатын-ҡыҙҙар союзы президиумы ултырышында ҡатнашҡан. Ултырышта сығыш яһағанда ул Янғантау шифаханаһына бик ҙур баһа биргән. Дәүләт Думаһы депутаты шулай уҡ башлыса ҡатын-ҡыҙҙар эшләгән Өфө трикотаж фабрикаһында булып, бында етештерелгән тауарҙар, эш шарттары менән танышҡан.

✓Законға ярашлы, административ штраф административ яуаплылыҡҡа тарттырылған кеше тарафынан закон үҙ көсөнә ингән ваҡыттан алып 30 көн эсендә түләнергә тейеш. Административ штраф түләнеүе тураһындағы документ булмаһа, был ваҡыт үтеү менән судья һәм ҡарар сығарған яуаплы кеше материалды суд приставына тапшыра. Бынан тыш, билдәләнгән ваҡыт эсендә штраф түләнмәгән осраҡта, административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол төҙөлә. Республика территорияһында 2009 йылда 221 протокол төҙөлгән.

✓Ошо көндәрҙә РФ Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан 50 килограмдан ашыу наркотик, шул иҫәптән 1,5 кг героин, 10 кг марихуана, 15 килограмдан ашыу мәк һаламы юҡ ителгән. 2009 йылда Башҡортостан Республикаһының наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса идаралығы тарафынан 400 килограмдан ашыу наркотик, шул иҫәптән 15 килограмм героин, 300 килограмдан ашыу марихуана, 100 грамм кокаин, шулай уҡ 10 миллион һумдан ашыу суммаға синтетик наркотиктар юҡ ителгән.

✓Йыл башынан Өфөлә "Док-Дуҫлыҡ монументы-Док" йүнәлешендә 45-се социаль маршрут автобусы йөрөй башланы.

АФАРИН!

# ТӘҮГЕ АҘЫМЫ УҠ ЕҢЕҮЛЕ...

## "Башҡортостандың социаль картаһы" проектының

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан ғәмәлгә ашырылыусы "Башҡортостандың социаль картаһы" автоматлаштырылған мәғлүмәт системаһы проекты 2009 йылдың 16 декабрендә Парижда (Франция) булып үткән "OSCARDS 2009" инновацион банк продукты халыҡ-ара конкурсында еңеүселәрҙең береһе булды.**

"OSCARDS" премияһы карта продукциялары өлкәһендәге халыҡ-ара наградаларҙың иң абруйлыһы. Быйыл конкурста 15 номинация буйынса 500-ҙән ашыу банк продукты ҡатнашты, шуларҙан 17-һе еңеүсе булараҡ һайлап алынды. "Башҡортостандың социаль картаһы" "US Bank" (АҠШ), "Taipei Fubon Commercial Bank" (Тайвань) банк продукттары менән бер рәттән, "Хеҙмәттәр" номинацияһында "Иң яҡшы инновацион банк продукты" премияһына тәҡдим ителде һәм еңеүсе генә түгел, ә Рәсәй проекттары араһында "OSCARDS" премияһын яулаусы тәүге проект булды.

"Башҡортостандың социаль картаһы"н наградлағанда уның хакимиәт сығымдарын кәметеү кимәле, дәүләт идара итеүенең һөҙөмтәлелеген арттырыуы, шул уҡ ваҡытта төбәктәрҙә йәшәүселәргә кәрәкле социаль хеҙмәттәрҙең тулы йыйылмаһын биреүе билдәләп кителде. Ысынлап та, карта хужаһына төрлө социаль пособиеларҙан һәм льготаларҙан файҙаланыу мөмкинлеге биргән күп функциялы, Рәсәй өсөн уникаль продукт булып тора. Картала ете функциональ ҡушымта тормошҡа ашырыла: федераль кимәлдәге ике ҡушымта - пенсия һәм мотлаҡ медицина страховкаһына, биш төбәк ҡушымтһы - социаль, дисконт, транспорт, һалым һәм банк өлкәләренә ҡағыла. Шулай уҡ киләсәктә белем биреү, ЮХХДИ, Росреестр, суд приставтары хеҙмәттәренә ҡағылған ҡушымталар тормошҡа ашырыласаҡ.

Бөгөнгө көнгә республикала проектта ҡатнашыусылар һаны 150 меңдән ашыу булһа, киләсәктә республиканың бөтә халҡы ла уның менән файҙаланасаҡ, тип көтөлә.

"Башҡортостандың социаль картаһы" проекты менән РФ Президенты Д.А. Медведев һәм РФ Хөкүмәте Премьер-министры В.В. Путин да танышты.

Башҡортостан тәжрибәһе РФ Дәүләт Советы менән РФ Президенты ҡарамағындағы Мәғлүмәт йәмғиәте үҫеше буйынса советтың берлектәге ултырышында юғары баһаланды. БР Хөкүмәте "Башҡортостандың социаль картаһы" проектын дәүләт хеҙмәттәре күрһәтеү өлкәһендә заманса мәғлүмәт технологияларын ғәмәлгә индереүгә йүнәлдерелгән төбәк мәғлүмәтләштереүенең пилот моделе булараҡ тәҡдим итте.

**БР Финанс министрлығы хәбәрҙәренән.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ӨҪТӨНЛӨК КӨҪӘП ТҮГЕЛ...

## ятраҡан өсөн өйрән туған телде



**(Аҙағы. Башы 1-се биттә).**

Быйыл да олимпиадала ҡатнашыусылар өс төркөмгә бүленде: лицей һәм гимназиялар, башҡорт мәктәптәре, рус мәктәптәре. Эш тәрҙәре элеккесә ҡалды: тәҡдим ителгән темалар буйынса инша яҙыу, викторина һорауҙарына яуап биреү, милли мәктәп уҡыусылары өсөн сәсәндәр бәйгеһе, рус мәктәптәре өсөн тасуири уҡыу, йәғни һөйләү телмәре кимәлен тикшереү. Һәр уҡыусыға уңайлы булһын өсөн өсөн номерҙар таратып бирелдэ, эштәр шифрланды һәм жюри ағзалары олимпиада тамамланғансы баланың исем-фамилияһын, уның ниндәй район йә ҡаланан икәнлеген белмәне. Шуға ла еңеүселәр бер үк районднан, бер үк мәктәптән булыуына аптырарға ла кәрәкмәй ине, тимәк, унда башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу, һәләтле балалар менән эшләү яҡшы ҡуйылған. Өфө ҡалаһының 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы, 140-сы Башҡорт гимназияһы, 44-се мәктәп, 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары ла уңышлы сығыш яһаны был олимпиадала. БР Мәғариф министры урынбаҫары Артур Сурин билдәләп китеүенсә, ҡатнашып та урын ала алмаған мәктәптәргә уйланырға урын бар, сөнки бөгөнгө көндә Мәғариф министрлығы һәм Хөкүмәт тарафынан башҡорт телен өйрәнеүгә бөтә шарттар тыуҙырылған, дәреслектәр ҙә, кабинеттар ҙа бар, тик уҡырға, эшләргә генә кәрәк. Шуныһы ла ҡыуандырҙы быйыл: уҡытыусылар ҙа, уҡыусылар ҙа бик ҡәнәғәт ҡалды жюри баһаларынан. Ағасты емешенә, остазын шәкертенә ҡарап беләләр: олимпиада еңеүселәрен әҙерләүсе уҡытыусыларға ла Мәғариф министрлығының маҡтау ҡағыҙҙары тапшырып һөйөндөрҙөләр.

Кем менән генә һөйләшһәң дә, олимпиаданың "Сәсәнлек бәйгеһе" тип аталған турын оҡшатыуҙарын әйтте ҡатнашыусылар. Лицейҙар һәм гимназиялар араһында беренсе урын алыусы Ейәнсура районының Иҫәнғол Башҡорт гимназия-интернатының ун беренсе синыф уҡыусыһы Фидалиә Ишбаева был турҙа ҡайны бер йәштәрҙең насар ғәҙәттәр менән дуҫлашыуын тәнҡитләп кенә ҡалманы, мәсьәләне хәл итеү юлдарын да тәҡдим итте. Уның фекеренсә, йәштәр ойошмалары булдырып, йәш быуынға дөрөҫ йүнәлеш биреүселәр булһа, һәр кем тормошта үҙ юлын таба алыр ине. Хәйбулла районының Йәнтеш мәктәбе уҡыусыһы Айгизә Ултыраҡованы ла яҡташтары сәсән, үткер ҡәләмле йәш хәбәрсе итеп белә. Тел, милләт яҙмышы, уның киләсәге, тәбиғәткә йүнсел ҡараш булмауы борсой Айгизәне, киләсәктә журналист һөнәрен үҙләштереп, ошо проблемаларҙы яҡтыртырға хыяллана.

Ҙур талантка - ҙур талап, тиҙәр, мәктәп, район этаптарын уңышлы үтеп килгән уҡыусыларға талаптар ҙа ҙур булды. Улар араһында, ҡыҙғаныҫҡа ҡурә, ҡағиҙәләргә тулыһынса яуап биргән, теге йәки был образға, йә булмаһа яҙыусының берәй күренеште тасуирлауына ҡарата үҙенең шәхси фекерен белдерә алған инша яҙыусылар һирәк осраһа ла, тулы формалы, тулы йөкмәткеле эштәр ҙә булды. Шулай ҙа ирекле темаға иншаларҙың күберәк булыуы, уҡыусыларҙың викторинала тел теорияһына ҡағылышлы һорауҙар алдында баҙап ҡалыуы, пунктуация ҡағиҙәләрен белмәүҙәрен иҫәпкә алып, жюри ағзалары уҡытыусыларға был тәңгәлдә ентеклэберэк эшләргә кәңәш бирҙе. Һуңғы осорҙа телгә иғтибар арта, тип маҡтанырға ятраһаҡ та, рух тәрбиәләү сараһы булған әҙәбиәткә йәмғиәт тарафынан иғтибар кәмей төштө һәм был, әлбиттә, олимпиадала ла сағылыш тапмай ҡалманы. Билдәле әҫәрҙәрҙең авторҙарын бутау, уларға анализ яһай белмәү кеүек етешһеҙлектәр телде - әҙәбиәттән, әҙәбиәтте телдән айырып ҡарауҙың кире эҙемтәләргә килтереүен күрһәтте лә инде.

Олимпиадалар хәрәкәте күптән рейтинг буйынса үтһә лә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаһында Мәғариф министрлығы бүлгән квота буйынса һәр районда уҡыусылар ҡатнаша ала. Министрлыҡтың милли мәғариф һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлеге етәксеһе Рәйсә Кузбәкова әйтеүенсә, был бер нисә йыл дауамында ғына башҡорт телен өйрәнә башлаған район балаларын олимпиадала ҡатнашыу хоҡуғынан мәхрүм итмәү өсөн эшләнә. Киләсәктә лә был тәжрибә дауам итәсәк, сөнки республика олимпиадаһында ҡатнашыу уларға артабан да үҫергә, яңы кимәлгә күтәрелергә ярҙам итә. Олимпиадала ҡатнашыуҙың әһәмиәтен уҡыусылар үҙҙәре лә яҡшы аңлай. Мәҫәлән, Благовар районы Ямаҡай мәктәбе уҡыусыһы Роза Батраева былтыр Маҡтау грамотаһы менән генә бүләкләнһә, быйыл ул рус мәктәптәре араһында беренсе урынға лайыҡ булды. Милләттәштәребеҙ күпләп йәшәгән күрше төбәктәр уҡыусылары араһында ла еңеүселәр айырым билдәләнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл юғары уҡыу йортона уҡырға ингәндә олимпиада еңеүселәренең айырым хоҡуҡтар менән ҡуллана алыуалмауы әлегә билдәле түгел, әммә быныһы өсөн артыҡ көйөнмәй ҙә улар, сөнки әсә телен ниндәйҙер өҫтөнлөктәр биргәне өсөн өйрәнеп булмай, уны ярытырға ғына мөмкин. Әйткәндәй, Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетына уҡырға ингәндә абитуриенттар араһында мәктәп олимпиадалары еңеүселәре лә льготаға эйә буласаҡ, тигән хәбәр бар, тимәк, республикабыҙ вуздары етәкселәре лә был мәсьәләне ыңғай хәл итергә тырышасаҡтыр. Етмәнә, бөгөнгө көндә туған тел һәм әҙәбиәт кеше өсөн иң мөһим төшөнсәләрҙе - милли рух, милли үҙаңды тәрбиәләүсе берҙән-бер сара булып тора, шуны онотмаһаҡ ине.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Былтыр БР Хөкүмәте эргәһендә Ғаиләне, әсәлекте, атайлыҡты һәм балалыҡты һаҡлау буйынса ведомство-ара совет булдырылғайны. Шындай советтар муниципалитеттар кимәлендә лә эшләй. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Ведомство-ара советта 30 579 балиғ булмаған бала тәрбиәләнгән 15 705 ғаилә иҫәптә тора. Һәр районда аҙ тәьмин ителгән һәм ауыр тормош шарттарында ҡалған ғаиләләр иҫәпкә алынған махсус мәғлүмәт банкыһы төҙөлгән. Муниципаль ведомство-ара совет уларҙың барыһына ла матди-көнкүреш хәле тураһындағы мәғлүмәттәр менән социаль паспорттар аҫҡан. Былар барыһы ла һәр ғаиләне реабилитациялау программаһын тормошҡа ашырыу өсөн нигеҙ булып тора.

✓Өфө территорияһында Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһын үткәреү өсөн 3,5 мең тирәһе хеҙмәткәр кәрәк буласаҡ. Баш ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә ошо хаҡта ла мәғлүмәт тыңланды. Кампанияға әҙерлек Өфөлә 2008 йылдан бирле алып барыла. Билдәләнеүенсә, иң ауыры йорттарҙы иҫәпкә алыу булған. Был аңлашыла ла, ҡалала яңы йорттар төҙөлә, туҙған йорттар һүтелә. Былтыр йәй көндәрендә регистраторҙар бар йорттарҙы ла йөрөп, яҡынса мәғлүмәттәрҙе тикшереп сыҡҡан.

✓Өфөнөң Орджоникидзе районында "Строитель" стадионында, "Нефтсе" спорт комплексында, Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркында, "Йөрүҙән" сауҙа үҙәге янында катоктар эшләй. Бөтә катоктарҙа ла конькиҙарҙы прокатҡа алырға мөмкин. Шулай уҡ районда 14 хоккей ҡабы эшләй. Саңғы шыуырға ятраҡан өсөн өс трасса булдырылған. "Биатлон" спорт-һауыктыры комплексында, "Нефтсе" стадионында, Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркында.

**✓Ошо көндәрҙә гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары - йәмәғәт эшмәкәре Рауил Өмөтбаев, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова, Мәләүез ҡалаһынан яҙыусы Мөнир Ишбулатов, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире Салауат Кәримов күркәм юбилейҙарын билдәләне. Уларҙы ихлас ҡотлайбыҙ. "Уңыш" тигән толпар дилбегәһен ҡулда ныҡ тотоп, бейеклектәр яулауҙы, бәхет-ҡыуаныстарға өлгәшеүҙе дауам итегеҙ. Иң изге теләктәребеҙҙе юллайбыҙ һеҙгә!**

ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА

# ЗАМАН ТАЛАБЫ,

## йәки Һәләтле бала айырым бағыуға мохтаж



**Математика - фәндәр батшаһы, тигән әйтем бар. Ысынлап та, бөгөнгө техноген донъяны математика фәненән башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Көнкүрештә ҡулланылған ябай приборҙарҙан алып, йыһан киңлектәрен гиҙгән космик аппараттарға тиклем бик күп заман ҡаҙаныштары математик теория һәм ғәмәлиәт нигеҙендә бар булған. Бөгөнгө мәғлүмәти-технологик революцияны ла математика фәненең йәшәйешебеҙҙә тамырынан үҙгәртә алыуын күрһәткән бер дәлил итеп ҡарарға кәрәк. Хатта тәү ҡарамаҡҡа ошо абстракт фән менән бер бәйләнеше лә булмағандай тойолған идара итеү өлкәһен дә математик объект сифатында тикшерә башланылар: заманса менеджментта идара итеүҙең математик моделдәрен ҡулланыу уңышҡа өлгәшеү өсөн яңы мөмкинлектәр булдыра.**

Рәсәй ғалимдары Ломоносов замандарынан бирле математика фәне үсешенең мәктәптән башланыуы хаҡында белдереп килде. Революцияға тиклем дә, унан һуңғы совет осоронда ла мәктәптәрҙә математика төп предметтарҙың береһе булды. Уҡыусыларҙың математик һәләттәрен үҫтереү буйынса фәнни тикшеренеүҙәр менән бер рәттән, уҡытыусы-новаторҙар математика фәнен уҡытыуҙа өр-яңы ысулдар уйлап тапты, үҙ тәжрибәләрен бөтә илгә таратыу мөмкинлегенә эйә булды. Бигерәк тә иң һәләтле балаларҙы һайлап алып, махсус физика-математика мәктәптәрендә вуздарға әҙерләү юғары кимәлдә башҡарылды. Тап шуның һөҙөмтәһендә совет математиктары бөтә донъя кимәлендә танылыу табып, оло абруй ҡаҙанды.

Бөгөн элекке совет мәктәбе системаһына тәнҡит күҙлегенән ҡараусылар етерлек булһа ла, ҡәҙимге эшебеҙҙә ул замандың ыңғай тәжрибәһенән ваз кисеү һис дөрөҫ булмаҫ ине. Иҡтисадта, сәнәғәттә артта ҡалыуыбыҙҙың сәбәптәрен мәктәп даирәһенән түгел, ил менән идара итеү өлкәһенән эҙләү хәйерлерәк икәнен хәҙер кемебеҙ ҙә белә. Ахырсиктә, йәшәйештең бар тарафтарында ла белемле һәм юғары компетентлы белгестәрҙең күберәк булыуы тормош кимәлебеҙҙе яҡшыртыу, ил абруйын күтәреү өсөн берҙәй ҡиммәтле булыуын онотмайыҡ. Урта мәктәптә 35 йыл эшләгән математика уҡытыусыһы булараҡ, уҡыусыларҙың математик һәләттәрен үҫтереү хаҡындағы ҡайһы бер фекерҙәремде әйтеп үтергә теләйем.

Математика уҡытыусыһының көндәлек эше - уҡыусыларға төп математик төшөнсәләрҙе аңлатыу һәм ошо нигеҙҙә мәктәп программаһы талап иткән ғәмәли күнекмәләргә өйрәтеү. Быға аң кимәле етерлек үҫешә алған һәр бала өлгәшә ала. Ошондай кимәл хәҙерге заман кешеһенең математик грамоталы булыуын аңлата. Әммә балаларға математик һәләтлелек тәбиғәттән бер тигеҙ бирелмәй, шуға күрә уларҙың ҡайһыларына был фән бик ауыр бирелһә, бәғзеләрендә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятып, уларҙың иң яратҡан шөғөләнә әйләнә. Нисек кенә булмаһын, мәктәпкәсә йәштә үк бала менән уның элементар логик фекерләү мөмкинлеген үҫтереүсе күнекмәләр уҙғарыу, предметтарҙы сағыштырырға, ябай ғына әҫәпләүҙәргә өйрәтеү әҙһеҙ үтмәй. Был йәһәттән хәҙерге ата-әсәләргә енелерәк тә: математика өлкәһе менән тәүләп таныштырыусы компьютер программалары менән эш итергә 3 йәшлек баланы ла өйрәтеп була. Шулай уҡ кескәйҙәр өсөн махсус сығарылған баҫмаларҙа уларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә йүнәлтелгән уйын-күнекмәләр бихисап, ата-әсәнең балаһына ваҡытын йәлләмәүе генә фарыз. Тап ошондай уйындар баланың математик һәләттәре хаҡында ярайһы уҡ аныҡ фараз итеү мөмкинлеген бирә.

Баланың ниндәйҙер һәләте төҫмөрләнә башлау менән уны тап ошо юҫыҡта тәрбиәләй башлау фарыз. Маҡсатлы күнекмәләр ярҙамында балаларҙың математик һәләттәрен дә бик юғары кимәлгә еткереп була. Хәҙерге Рәсәй мәктәбендә юғары кластарҙа ғына башланған профилле уҡытыуға һылтанып, предметтарҙы тәрәнәйтеп өйрәтеүгә үтә һуң тотоналар. Бөтәһе өсөн бер иш булған мәктәп программалары сиктәрендә математик һәләттәре иртә формалаша башлаған уҡыусыларҙың артабанғы үҫешен тиҙләтеп булмай. Ваҡытында гимназия һәм лицейҙарҙа асылған математика кластары ошо йәһәттән бик уңайлы ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге мәктәптә һәләтле балалар өсөн урта кластарҙан уҡ айырым уҡыу пландары булдырыу рөхсәт ителмәй, шуға күрә математика уҡытыусыһына улар менән шәхси эш алып барыуҙан башҡа юл ҡалмай. Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы Роман Хазанкин төҙөгән компьютер мәктәбе, хәҙерге мәғариф ҡалыптарына һыймаған хәлдә лә, йәш таланттарҙы күпләп үҫтерә алыусы берҙән-бер уҡыу үҙәге булып ҡала. Киләсәктә Өфөлә физика, математика һәм информатика буйынса республика кимәлендәге махсус мәктәп-интернат асыла ҡалһа, әле иғтибарҙан һәм тейешле уҡытыу шарттарынан мәхрүм ҡалған бик күп һәләтле балаларға яңы мөмкинлектәр барлыҡҡа килер ине.

Ҡасандыр, башҡорт балалары тәбиғи һәм техник фәндәрҙе үҙһенмәй, тигән фекер бар ине. Әммә был нигеҙле һығымта түгел: башҡорттарҙың милли биогенетик һәм интеллектуаль булмышының тулыһынса асылып бөтмәүе арҡаһында ғына тыуған ул. Ябай мәктәп уҡытыусыһы ла айырым уҡыусылар менән өҙәйлы һәм маҡсатлы эш алып барһа, уларҙың математик фекерләү ҡеүәһен үҫтереп, ижади һәләттәренә юл аса ала.

Математика фәне буйынса ла заманса уҡытыу технологияларын өйрәнеү, уҡытыусы-новаторҙар тәҡдим иткән ысулдарҙы ижади үҙләштереү, һәләтле балалар өсөн сығарылған өҫтәлмә уҡыу әсбаптарын ҡулланыу бик файҙалы. Беҙҙең уҡыусыларыбыҙ араһында математика һәм информатика өлкәһенә ылыҡҡыусы һәләтле балалар етерлек, тик уларға ваҡытында дөрөҫ йүнәлеш биреп, улар менән шәхси эш алып барыу өсөн үҙ ваҡытыңды йәлләмәү генә фарыз.

**Вилиә БӘҘРЕТДИНОВА,**
**БР-ның мәғариф алдынғыһы,**
**РФ-ның дөйөм белем биреү буйынса почетлы хеҙмәткәре.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫН...

## торлаҡ кредитын ҡаплауға

**● Рәсәй пенсия фондының БР буйынса бүлексәһенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда 1,1 миллиард һумдан ашыу әсәлек капиталы аҡсаһы торлаҡ кредитын ҡаплауға күсерелгән.**

Был һөҙөмтәгә Рәсәй Хөкүмәтенең кризисҡа ҡаршы саралар күреүе арҡаһында өлгәшелгән. Был иһә әсәлек капиталы аҡсаһын, баланың өс йәше тулыуын көтмәйенсә, торлаҡ кредитын түләүгә файҙаланыу һәм көндәлек кәрәк-ярақ өсөн 12 мең һум күләмендә бер тапҡыр аҡса алыу мөмкинлеге бирә. Быйыл тағы 4844 ғаилә әсәлек капиталын торлаҡ кредитын ҡаплау өсөн йүнәлтергә ҡарар иткән. Бынан тыш, 61 671 ғаилә бер тапҡыр түләнә торған аҡса алыуға ғариза яҙған. Шуларҙың 56 меңдән ашыуы был аҡсаны ҡулына алған да инде.

**● 2010 йылда Башҡортостан Республикаһы буйынса бушлай дарыу һәм шифахана-курортта дауаланыу кеүек социаль хеҙмәтләндереү хоҡуғын 81 113 кеше, ҡала яны тимер юл транспортында бушлай йөрөү хоҡуғын 69 988 кеше һаҡлап ҡалған.**

Дөйөм алғанда, республикала 393 271 кеше айлыҡ аҡсалата түләүҙәр ала ине. Был түләүҙәр алыусыларҙың дөйөм һанынан 303 468 граждан йәки 82,9 проценты быйыл социаль хеҙмәтләндереү тупланмаһының натураль төрөнән, 5760 кеше бушлай медицина ярҙамы алыуҙан, ә 16 869 кеше ҡала яны тимер юл транспортында йөрөү мөмкинлегенән баш тартҡан. Былтыр 1 ғинуарҙан айлыҡ аҡсалата түләүҙәр алыусылар өсөн социаль хеҙмәтләндереүҙән баш тартыу ғаризаһы менән мөрәжәғәт итеү тәртибе ябайлаштырылғайны. Хәҙер бер тапҡыр ғариза биргәндән һуң, уны йыл һайын ҡабатлап тороуҙың кәрәге юҡ.

**● Былтыр Башҡортостан Республикаһы өсөн мөһим булған 33 яңы предприятие сафҡа индерелде. Был, үҙ сиратында, республиканың тағы 26 предприятиеһында 6 меңдән ашыу эш урынын һаҡлап ҡалыуҙы тәъмин итте.**

Шулар араһында Өфө трансформатор заводы, керамик плиталәр етештереп сығарыусы "Ласселсбергер" заводы. Нефтте яңынан эшкәртеү тәрәнлеген арттырыу маҡсатында "Өфөнефтехим" ойошмаһында яңы комплекс төҙөлдө. Белоруссия партнерҙары менән берлектә Башҡортостанда "Белорус" тракторҙарының ике моделен йыйыу эштәре башланды. Аграр секторға килгәндә, республикала йылына 15 мең тонна күркә итә етештереүсе ҡеүәтле эре ҡошсолоҡ проекты тормошҡа ашырыла. "Нефтекама автозаводы" ойошмаһы "VDL" концерны менән берлектә яңы автобус моделдәре: туристик, ҡала-ара һәм 15 метрлы ҡала автобусы сығарыуҙы үҙләштерҙе. Шулай уҡ "Лаверда" итальян фирмаһы менән берлектә "Челленджер-647" комбайнын етештереү йәйға һалынды. "Башҡортостан троллейбус заводы" һәм Нефтекама автозаводы менән берлектә БТЗ - НефАЗ-52765А яңы троллейбусы сығарылды. Дөйөм алғанда, Башҡортостан территорияһында 60 мең яңы эш урыны булдырасаҡ 78 мегапроектты тормошҡа ашырыуға әҙерлек эштәре бара.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

# ХӘРӘКӘТТӘ - БӘРӘКӘТ

Ҡартая барған һайын аҙыраҡ хәрәкәтләнергә күнегәбеҙ. Аҙ хәрәкәтләнгән һайын, тәндең ауырлығы ла арта, былай ҙа көсһөҙәйә барған быуындар ауырлыҡты күтәрә алмай башлай. Юҡҡа ғына боронғолар "Хәрәкәттә - бәрәкәт" тимәгәндәр. Организмға диванда ятыуға ҡарағанда, күберәк хәрәкәтләнеү файҙа килтерә.

Хәрәкәт ярҙамында ҡеүҙә ауырлығы кәмей, һөҙөмтәлә, юғары ҡан баҫымы нормаллаша, йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙары юҡҡа сыға. Йәйәү йөрөүҙең файҙаһы иҫ киткес ҙур, мөмкинлек булғанда, һыуҙа йөҙөп алыу ҙа ҡамасауламаҫ, киреһенсә, организмдың бар мускулдары нығынып ҡалыр. Мин һеҙгә өс күнекмә тәҡдим итәм, уларҙы көн һайын эшләү кәүҙәне һомғол көйө һаҡларға ярҙам итәсәк.

**1-се күнекмә.** Эс мускулдарын нығытыу өсөн: балаҫҡа ултырырға ла, ҡулдарҙы артҡа ҡуйып, улар менән иҙәнгә таянырға. Аяҡтарҙы бергә тотоп, өҫкә күтәрергә һәм яй ғына аҫҡа төшөрөргә. Күнекмәне 5 тапҡыр эшләгәс, ял итеп, тағы ҡабатларға.

**2-се күнекмә.** Билде нескә тотор өсөн: тубыҡланып иҙәнгә торабыҙ, ҡулдарҙы билгә таянабыҙ. Уң ҡулды өҫкә күтәреп, һул яҡҡа эйелергә, икенсе ҡул менән дә ошо уҡ хәрәкәтте ҡабатларға.

**3-сө күнекмә.** Тубыҡланып торорға, ҡулдарҙы тәнгә һылаштырып тоторға ла, яйлап ҡына артҡа бөгөлергә. Ошо хәлдә бер аҙ торғас, ултырырға. Аяҡтарҙы бергә тоторға. 10 тапҡыр ҡабатларға.

Кәүҙәне тура тотоу ҙа оло әһәмиәткә эйә. Кәүҙә тура булғанда ғына эске ағзалар дөрөҫ эшләй икәнен бер ҡасан да иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Төҙ йөрөргә өйрәнеү ғәҙәткә инһен өсөн бер нисә ысул да бар: уйығыҙҙан ғына ике ҡалаҡ һөйәге уртаһына грек сәтләүеге ҡуйығыҙ ҙа, ул төшөп китмәһен өсөн, ҡалаҡ һөйәктәре менән уны тотоп йөрөгөҙ; стенаға үҡсәләр, оса, арҡа һәм елкәне тейҙереп баҫығыҙ һәм кәүҙәгеҙҙе гел ошолай торорға өйрәнегеҙ; өйҙә саҡта башығыҙға ауыр ғына китап һалып йөрөп алығыҙ; төрлө күнекмәләр эшләп, арҡа мускулдарын нығытығыҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Һөйләүсе булһа, яҡшы тыңлағыҙ. Тауышығыҙҙы кеше тауышынан өҫтөн күтәрмәгеҙ. Кәрәкмәһә, көлмәгеҙ, мәжлескә лайыҡ булмағанды һөйләмәгеҙ, һөйләүсенең һүҙен бүлмәгеҙ.*






## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Йоҡо ҡағиҙәләре

● Йоҡлағанда өҫтөгөҙгә берәй нәмә ябынып ятығыҙ, һалҡындан һаҡланығыҙ. Һауа йөрөгән һәм еүеш урындарға ятмағыҙ. Тәҙрәләрҙе асыҡ ҡалдырмағыҙ.

● Мәжбүри хәл тыумаһа, бер бүлмәлә күмәкләп йоҡламағыҙ. Йоҡлаған ерҙә сәскәләр һәм гөлдәр булмаһын. Ҡайғылы йәки бик шатлыҡлы ваҡыттарығыҙҙа йоҡламағыҙ.

● Йоҡлағанда тар кейемдәрегеҙҙе сисегеҙ. Ҡыҫҡан урындарын бушатып, ҡан хәрәкәтен тотҡарлатмаҫлыҡ итеп ҡуйығыҙ.

● Йоҡлағанға тиклем һәм һуңынан йоҡо бүлмәләренең тәҙрәләрен асып, һауаһын яңыртығыҙ.

### Мәжлес ҡағиҙәләре

● Халыҡ алдында әҙәпле итеп үҙегеҙгә лайыҡлы урынға ултырығыҙ. Хөрмәтле кешеләр булғанда уларҙы ихтирам итеп бер аҙ йырағыраҡ ултырығыҙ. Әгәр яндарына ултырырға мохтаж булһа ғына йәки улар теләһә, эргәләренә ултырығыҙ.

● Ултырғысығыҙға ятмағыҙ, бер яҡҡа ауышмағыҙ, аяҡтарығыҙҙың береһен икенсеһе өҫтөнә ҡуймағыҙ, ергә типмәгеҙ, уйнамағыҙ.

● Һөйләүсе булһа, яҡшы тыңлағыҙ. Тауышығыҙҙы кеше тауышынан өҫтөн күтәрмәгеҙ. Кәрәкмәһә, көлмәгеҙ, мәжлескә лайыҡ булмағанды һөйләмәгеҙ, һөйләүсенең һүҙен бүлмәгеҙ, мәжлестәгеләрҙең хәрәкәтендә кәмселек эҙләмәгеҙ.

● Халыҡ алдында иң мөхәббәтһеҙ кеше мәжлестә үҙен оло итеп күрә. Шуның өсөн үҙегеҙҙе башҡаларҙан оло тип иҫәпләмәгеҙ, үҙегеҙҙең дәрәжәгеҙҙе белегеҙ.

### Ашау ҡағиҙәләре

● Ашауға ултырыуҙан алда ҡулығыҙҙы йыуығыҙ һәм яҡшылап һөртөгөҙ.

● Үҙегеҙҙән оло кешеләр булһа, уларҙан алдараҡ ултырмағыҙ.

● Аш янындағы нәмәләр менән уйнамағыҙ, әҙәпле булығыҙ.

● Таҫтамалды тубыҡтарығыҙға һалығыҙ (ҡайһы берәүҙәр күкрәккә ҡуйыуҙы дөрөҫ тип иҫәпләй.) аштан бик йыраҡ һәм бик яҡын ултырмағыҙ. Күршеләрегеҙҙе ҡыҫтамағыҙ, бер нәмәгә лә таянмағыҙ, тура ултырығыҙ. Ашағанда аҙ ғына эйелегеҙ.

● Башлағанда бисмилла уҡып, уң ҡулығыҙ менән ашағыҙ. Бөткәс, Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итегеҙ.

● Күп итеп алмағыҙ, ашыҡмағыҙ, яҡшы сәйнәгеҙ, ҡул һәм кейемдәрегеҙҙе буямағыҙ. Табаҡтан үҙегеҙ өсөн нәмә һайламағыҙ, башҡаларҙың ашағанына ҡарап ултырмағыҙ. Ҡомһоҙ булмағыҙ, күп ашарға ғәҙәтләнмәгеҙ, ашауҙан теләгегеҙ бөтмәйенсә туҡтамағыҙ. Быңдай нәмәләрҙең сәләмәтлек өсөн файҙаһы күп булыуын үҙегеҙ ҙә белерһегеҙ.

● Фекерегеҙҙе гел ашау өсөн сарыф итмәгеҙ. Маҡсатығыҙ йәшәү өсөн ашау булһын, ә ашау өсөн йәшәү булмаһын.

● Һөйләшеп ашаған аш еңел һеңһен өсөн, ҡысҡырышмай, һүҙ көрәштермәй, әҙәпле генә һөйләшегеҙ.

● Ҡулығыҙҙы табаҡҡа тыҡмағыҙ, ашҡа буямағыҙ.

● Бешеп етмәгән емештәрҙе ашамағыҙ, эҫе ваҡытта майлы аштар ашауҙан һаҡланығыҙ.

● Үҙ ваҡытында ашарға ғәҙәтләнегеҙ, ваҡыты килеп тә ашарға теләгегеҙ булмаһа, көсләп ашамағыҙ. Ашағанда кейемегеҙ тар булмаһын. Оло ҡайғылы йәки шатлыҡлы ваҡыттарығыҙҙа ашамайынса, бер аҙ сабыр итегеҙ.

● Ауыҙығыҙға алған нәмәләрҙе тулыһынса сәйнәгеҙ, ашыҡмағыҙ, артыҡ оҙаҡҡа ла һуҙмағыҙ. Ашауҙы егерме-утыҙ минутта тамамлағыҙ. Ашағандан һуң ике сәғәт үтмәйенсә йоҡламағыҙ һәм ауыр эштәр эшләмәгеҙ.

● Ни ҡәҙәре оло ғәйебе булһа ла, аш алдында һис кемде лә шелтәләмәгеҙ һәм берәүҙе лә ғәйепләмәгеҙ.

● Аштан һуң ҡул һәм ауыҙығыҙҙы һабын менән яҡшылап йыуығыҙ, теш араһында әйберҙәр ҡалдырмағыҙ. Мөмкин булһа, йоҡламай бер аҙ ятып торoғоҙ.

*ҒӘЖӘП ХӘЛДӘР...*

# ӘРМЕМЕ БЫЛ...

## әллә холоҡ төҙәтеү урынымы?



**"Баламды бер ҡасан да армия сафына ебәрмәйем!" - аҙарынып, ҡайғырып, йөрәк түренән сыҡҡан был һүҙҙәрҙе хәҙер йыш ишетергә тура килә. Ҡасандыр көслө һәм ҡеүәтле булған әрме өсөн күңел һыҙлап ҡуя. "Кемдер беҙҙе һаҡларға тейеш бит", - тиеүемә: "Ҡарарбыҙ әле, улдарыңдың кемеһе артыҡ булыр", - тигән яуап һүҙҙәр йөрәккә хәнйәр булып ҡаҙала.**

Ҡайһы бер кешеләрҙең әрмегә саҡырылыусыларға ҡарата мөнәсәбәтенә лә һушың китер. "Башы эшләмәгәс, армияға китте", тип кенә ебәрәләр. Хатта ҡайһы берәүҙәрҙең енәйәт ҡылған улдарын төрмәгә ултыртмаҫ өсөн әрме сафына оҙатыу күренештәре лә аҙым һайын хәҙер. Бының өсөн ата-әсә зыян күргән кешеләргә һуңғы аҡсаһын, мөлкәтен бирергә әҙер. Шулай булғас, әрмелә ниндәй тәртип булһын инде?

Рәмил - ғаиләлә берҙән-бер һәм иркә үҫкән малай. Ата-әсәһе уның бар теләген тормошҡа ашырып ҡына тора. Әсәһенең һаулығы ҡаҡшау сәбәпле, табиптар уға башҡа бала тапмаҫҡа ҡуша. Шуға күрә берҙән-бер улдары оло иғтибарға, артыҡ иркәләүгә өйрәнә. Мәктәпкә малай тик тиҫтерҙәре менән аралашыу өсөн йөрөй, тиһәң, дөрөҫөрәк булыр. "Мин уны насарлап бер һүҙ әйтә алмайым. Үҙенсә тырышты, бәлки, тәбиғәттән һәләте булмағандыр. Бигерәк тә теүәл фәндәрҙән насар өлгәште. Дәрестәрен йыш ҡына әҙерләмәй килә торғайны. Мәктәптә әллә ни тәртип боҙмаһа ла, унан ниндәйҙер хәүеф килгән кеүек тойола ине. Күңел һиҙемләүе булдымы икән?" - ти уҡытыусыһы.

Ун дүрт йәшендә Рәмил балиғ булмағандар эше буйынса инспекция тарафынан теркәүгә алына. Сөнки малай иҫерек көйө тотола, тәмәке тартҡанлығы беленә, хулиганлыҡ ҡыла. Ата-әсәһенең өгөт-нәсихәте, әрләүе Рәмилде туҡтата алмай. Ул үҙен иркәләп, ҡәҙерләп үҫтергән кешеләргә ҡарағанда, урам тормошон нығыраҡ ярата. Һыра эсә башлаған малай артабан араҡы, көмөшкә һемерә. Әлбиттә, быңдай тормош алып барған малайҙа уҡыу ҡайғыһы булмай. Ул туғыҙынсы синыфты көскә тамамлай ҙа, артабан эшләргә лә, уҡырға ла теләмәй. Ата-әсәһе - эштә, Рәмил төшкә тиклем йоҡлай, унан әсәһе бешергән тәмле ризыҡты ашап, урам ҡыҙырырға йүнәлә. Үҙе кеүек дуҫтары барлыҡҡа килә. Улар көндөҙ урамда, кистәрен дискотека йә подъездарҙа "күңел аса".

Бер ҡайҙа ла эшләмәгән егеттәрҙе һәр саҡ бер нәмә генә борсой - ҡайҙан эсергә табырға? Тиҙҙән Рәмил урамда аҙып-туҙып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар менән эсә башлай. Улар менән бергә ҡаланың притондары менән танышып ала. Йәш егет менән урамда ҡултыҡлашып йөрөүен әллә ни күргән ҡатындар уның өсөн талашып та китә. Шуға күрә улар һәр саҡ Рәмил өсөн көмөшкә табырға, бергә булырға тырыша. Бала саҡтан ап-аҡ, йомшаҡ юрғандар ябынып йоҡлаған егеткә тиҙҙән бысраҡ сепрәк-сапраҡ өҫтөндә, әҙәм төҫө юйылып бөткән берәй ҡатын менән уяныуы ла оят булмай башлай. Ул ауыртҡан башына ымлап, эргәһендәген ойошҡан сәстәренән елтерәтеп, көмөшкәгә ебәрергә лә өйрәнеп ала.

Ошондай притондарҙың береһендә Рәмилде әсәһе килеп тапҡан, тиҙәр. Әсә кеше өсөн бала, ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, һәр саҡ ҡәҙерле шул. Рәмилдең әсәһе лә улы тураһындағы төрлө хәбәрҙе ялған тип һанай. Әммә ярым емерек өйҙән яланғас килеп сығып, үҙен әшәке һүҙҙәр менән әрләгән балаһын күреп, ҡатып ҡала.

Ошо хәлдән һуң күп тә үтмәй, Рәмил енәйәт ҡыла. Ул көндө Рәмил көмөшкә эҙләп сығып китә. Тәүҙә өйҙәренә ҡайтып, берәй нәмә "елгәрергә" уйлай. Әммә атаһынан ҡурҡып, туҡтап ҡала. Ата кеше Рәмилде тәрбиәләүҙән ситтә торһа ла, улы барыбер унан шөрләңкерәй, әлбиттә. Нимә ашатырға, ниндәй төҫтәге кейем алырға, кемдәр менән дуҫлашырға, ниндәй мәктәп һайларға - бөтә был мәсьәләләрҙе өйҙә әсәй хәл итә. Үтә мыжыҡ булып үҫкән Рәмилгә атаһы ҡатыраҡ өндәшһә, ҡатыны: "Һинең икенсе кешенән дә балаң була ала, ә минеке - юҡ. Шуға күрә улымды үҙем тәрбиәләйем, ҡыҫылма!" - тип кенә ебәрә. Улы бер ҡайҙа ла уҡырға, эшләргә теләмәгәндә лә ҡатыны уға һүҙ тейҙермәй. Әммә уның эскелеккә һалышыуын һиҙеп ҡалған ата тәүге тапҡыр Рәмил менән ирҙәрсә һөйләшә. Атаһының бер ҡасан да үҙенә лә, әсәһенә лә тауыш күтәргәнен ишетмәгән егет ҡаушап ҡала, унан өйҙән сығып китә.

"Эх, атай, элегерәк шулай әрләһәң ине!" Шулай уйланып, йәне көйөп йөрөгән Рәмил ҡаршыһына килгән үҫмерҙе йығып һала ла, туҡмай башлай. Аҡса таптырған был әҙмәүерҙәй егеттән ҡурҡҡан малай кеҫәһенән тинлектәр сығарып бирә. Унан тәненең иҫ киткес һыҙлауына ҡарамаҫтан, өйөнә табан йүгерә. Йөҙө һурыштан, ҡанға буялған малайҙы дауаханаға килтерәләр. Уның туҡмалған тән йәрәхәттәре суд-медэкспертиза тарафынан уртаса ауырлыҡтағы тип табыла.

Рәмил үҙенең ғәйебен тулыһынса танып, ғәфү үтенә. Ғәйепләнеүсегә ҡарата яҙылған холоҡнамә судта ҙур әһәмиәткә эйә була. Туҡмалған малай ҙа, уның ата-әсәһе лә шәфҡәтле кешеләр булып сыға. Улар Рәмилде ғәфү итә, шуға күрә иректән мәхрүм итмәүҙе һорай. Рәмилдең ата-әсәһе лә судта улдарының бик һәйбәт, аҡыллы егет булыуын белдерә. "Уның ун һигеҙе тулды, армия сафына барырға мөмкинлек бирегеҙ", - тип үтенә...

Кешене ситлеккә бикләп тәрбиәләп булмай, әлбиттә. Шулай ҙа ни өсөн эш боҙған һәр йәш кешене тиерлек тиҙерәк әрмегә ебәрергә ынтылалар? Ҡайһы бер һалдаттарҙың закон менән һыйыша алмаусылар рәтенән булыуы яҡшы ғаиләнән сыҡҡан, ысын күңелдән Ватанына хеҙмәт итергә теләгән егеттәргә ауырлыҡ тыуҙырмаймы икән ни? Бәлки, шуға күрә кемдеңдер ғәзиз балаһы цинк табутта ҡайталыр?

Хәҙерге ваҡытта Рәмил дә әрме сафында. Уның ысын күңелдән төҙәлеүен, башҡа бер ҡасан да енәйәт ҡылмауын, ата-әсәһенә һәм уны төрмәнән алып ҡалған туҡмалған малайҙың ғаиләһенә мең рәхмәтле булыуын теләге килә. Тик ул үҙенә ҡарата булған изгелекте аңлармы икән?

"Улай улыңдың ыҙалатыуына түҙеп йәшәгәнсе, военкоматҡа бар ҙа, ебәр армияға, аҡылға ултыртып ҡайтарырҙар. Унда белер әсәйҙең дә, икмәктең дә ҡәҙерен. Белмәһә, исмаһам, ике йыл тыныс йәшәрһең..." - бер ҡатындың икенсеһенә аҙарынып-асыуланып аҡыл өйрәтеүен ишетеп, "туғандарҙыр", тип уйлап ҡуйҙым. Быларҙың барыһын да ишетеп-кисергәндәрҙән һуң, бер һорау әле лә тынғы бирмәй: Ватанды һаҡлаусы ҡеүәтле хәрби көстәр ҡасандан алып тәртип боҙоусылар, йүнһеҙҙәр өсөн йәшеренеү урынына әүерелде әле?

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

✓ *Иҫ китмәле юғарылыҡҡа өлгәшкән ғалимдың үлеменән һуң ҡырҡ йылдан һуң да иғтибар үҙәгендә булыуы ғәжәп түгел, һәм уға яғылған яла бөтә төрки халыҡтарының намыҫына тейә.*



*ХӘҠИҠӘТКӘ ҠАРА ЙОҠМАЙ*

# ҺҮҘЕ - ЯЛҒАН, ҮҘЕ - ЯЛА ЯҒЫУСЫ,

## йәки депутат Назаровтың үҙен-үҙе фашлауы

**Шундай тарихи шәхестәр була: улар фани донъянан китеп, байтаҡ йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, үҙҙәре тере сағындағынан да яманыраҡ дошмандары табылып тора. Күрәһең, кемдеңдер йәмғиәт тормошонда, хәҡиҡәт һәм фән юлында яулаған бейеклеге һәм дә бөйөклөгө ваҡ һәм төҫһөҙ әҙәмдәргә һис тынғылыҡ бирмәй. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының иң күренеклеләренең береһе булған Әхмәт-Зәки Вәлидиҙең исеменә лә ҡара яғыусылар әленән-әле табылып тора.**

Әлбиттә, хәҙерге замандың әтрәгәләм шовинистары Рәсәйҙә генә түгел, ә Европа һәм Азия илдәрендә лә бөйөк шәхес һәм атаҡлы Көнсығыш ғалимы булараҡ танылыу тапҡан заттың көсөргәнешле көрәш менән тулы ғүмерендә осраған дошмандары менән һис сағыштырып булмай. Зәки Вәлидиҙең федерализм идеяларын ҡабул итә алмаған унитаристар, айырым Башҡортостан автономияһына ҡаршы сыҡҡан Саҙри Мәҡсүди, Зыя Исхаҡи кеүек Ҡазан зыялылары, шовинист большевиктар, аҡ монархистар, үҙ хакимына яраҡлашырға тырышыусы ҡайһы бер төрөк тарихсылары һәм сәйәсмәндәре - улар барыһы ла тиерлек заманына күрә үҙ позицияһын яҡларға тырышҡан. Вәлиди баш бирмәгән Ленин, Сталин, адмирал Колчак, хәҡиҡәткә хыянат итмәҫ өсөн ҡаршы һүҙ әйтеүе арҡаһында асыуы ҡабарған Ататөрк ҡушаматлы Мостафа Кемаль, уны 1944 йылда төрмәгә яптырған диктатор Исмәт паша - бына ниндәй шәхестәр менән тиң кимәлдә (бәлки, өҫтөнөрәк тә!) тоткан үҙен Көҙән башҡорто.Гәзитебеҙҙә (2009 йылдың 22-се һанында) "Алтынға нәжес йоҡмай, йәки Зәки Вәлидигә яла яғыусы шовинистар ни көҫәй?" исеме аҫтында тарих фәндәре докторы Марат Ҡолшәриповтың тап ошо темаға арналған бик ентекле һәм нигеҙле мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны инде. Әммә урыҫ әйтемендәгеләй, "быҫраҡтан сыҡҡан да кенәз исемен таҡҡан" РФ Дәүләт Думаһы депутаты Андрей Назаров парламент трибунаһынан бөтә Рәсәйгә яр һалды: Башҡортостанда Өфө урамдарының береһенә фашистар менән бәйләнеш тоткан Ә.-З. Вәлиди исемен биргәндәр! Ошо депутат шәрәмәте берәй иҫ китмәле рәсми документ тапҡанмы ни? Ә ундайҙарға нинә документ кәрәк, уларҙың башҡаларҙың башына һис бер һыймаған үҙ логикаһы бар бит, һәм ул бына нимәнән ғибәрәт: әйткәнең ни тиклем түҙға яҙмағанырак, йәғни абсурдыраҡ булһа, ул шул тиклем ҙур сенсацияға әүерелә. Көлһәң - көл, көлмәһәң - депутат Назаровтың наҙанлығына аптыра: унынса, Вәлиди Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында поляк разведкаһы менән бәйләнештә торған, имеш, ә уныһы, үҙ сиратында, герман разведкаһына эшләгән. Бына ҡайҙа яңылыҡ, бына ҡайҙа Назаровса сенсацион асыш: 1939 йылда уҡ фашистик Германия тарафынан оккупацияланған Польшаның Лондонға ҡасып китергә мәжбүр булған хөкүмәте һәм разведкаһы үҙ дошмандарына хеҙмәт иткән дә баһа! Назаров әфәнде мәктәптә тарих дәрестәрен йоҡлап уҙғарҙымы икән, быны уҡыусылар белә ҡалһа, эс тырнап көләсәк бит уның ошо аңраһылығынан. Ошо яңылыҡты интернет селтәренә сығарған Росбалт агентлығы журналистары ла уның һымаҡ тома наҙандыр, ахырыһы, югиһә, аҙ ғына булһа ла мейе күҙәнәктәрен "ҡыбырлатырҙар" ине. Был осраҡта бер боронғо әйтемде бер аҙ үҙгәртә биреп, "Тамуҡҡа юл ялған һәм яла яғыусы һүҙҙәр менән түшәлгән", тип әйтеү хаҡ булыр ине.

Бәлки, ошо түҙға яҙмаған нәмә тураһында һүҙ ҡуҙғатып тороу ҙа кәрәк булмаҫ ине, әммә сығырынан сыҡҡан депутат Назаров күберәккә өмөт итә бит. Ул Дәүләт Думаһынан үҙе иғлан иткән ялғанды ФСБ тарафынан тикшертеүҙе һорап мөрәжәғәт итеүҙе талап итә. Үәт, исмаһам, логика, депутат креслоһынан йығылып төшөрлөк: Назаров был осраҡта үҙ ялғанына үҙе ышанып, мәрәкә хәлдә ҡалған Хужа Насретдинды хәтерләтә, тиер инем, был фольклор геройын быстратыуға тиң булыр, тип шөбһәләнәм. Башҡортостандан "Берҙәм Рәсәй" партияһы исемлеге аша депутат вазифаһын алған ошо әҙәмдең ҡылығын үҙе эскән ҡойоға төкөрөү, йәниһә, быҫраҡҡа буялып, аяҡ аҫтында бутаһып йөрөп ҡаңғырған сәүек көсөктөң үҙ хужаһына сәңкелдәп өрә башлауы, тип баһалау бик хаҡтыр.

Үрҙә һөйләнгән хәлдәрҙе етди ҡабул итмәйенсә булмай, сөнки башҡа сарабыҙ юҡ. Тап шуны аңлаған өсөн "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгрессы), БР Халыҡтар дуҫлығы йорто, БР Яҙыусылар союзы, байтаҡ ҡына йәмәғәт, йәштәр ойошмалары, билдәле ғалимдар, журналистар ҡатнашлығында Ә.З. Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған түңәрәк өҫтәлдә бик ентекле һәм төплө фекер алышыу уҙғарылды. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) рәйесе Азамат Галин ойошманың Башҡарма комитеты тарафынан "Берҙәм Рәсәй" Бөтә Рәсәй сәйәси партияһы рәйесенә Мөрәжәғәт ебәрелеп, унда партия ағзаһы Назаровты яуаплылыҡҡа тарттырып, унан яла яҡҡан һүҙҙәре өсөн ғәфү үтенеүҙе талап итеү хаҡында һоралауын белдерҙе. Түңәрәк өҫтәлдә сығыш яһаған ғалимдар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, журналистар депутат Андрей Назаровтың төптә ялғанға ҡоролған уйҙырмаларын фашлап, бер тауыштан ҡырҡа протест белдерҙе.

Ә.З. Вәлидиҙең тормош юлын һәм ғилми мираҫын бик төплө өйрәнгән философия фәндәре кандидаты, БР Президенты Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш бүлеге мөдире Әмир Юлдашбаев Көнсығыш тарихын бөтә донъяға яңынан һәм яңыса аса алған бөйөк тикшеренеүсенең барлыҡ төрки халыҡтары өсөн үтә ҡәҙерле булыуын билдәләп үтте. Уның ғилми мираҫы уҙған быуат өсөн нисек ҡиммәт булһа, бөгөн һәм яҡын киләсәктә лә көнүҙәклеген юғалтмаясаҡ. Иҫ китмәле юғарылыҡҡа өлгәшкән ғалимдың үлеменән һуң ҡырҡ йылдан һуң да иғтибар үҙәгендә булыуы ғәжәп түгел, һәм уға яғылған яла бөтә төрки халыҡтарының намыҫына тейә. Әммә бындай бөйөктәр менән бәхәскә тик уның фекерләү кимәленә етә алғандар ғына баҙнат итә ала, һәм һәр төрлө бысраҡ алымдар уны тарихыбыҙҙан юйып ташлау мөмкинлеген бирмәйәсәк, тип иҫәпләй Вәлиди мираҫын тыуған иленә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған ғалим.

Академик Нияз Мәжитов 1990 йылда, Ә.З. Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған ғилми конференциянан алдараҡ, ул саҡтағы Дәүләт именлеге комитеты тарафынан уның Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытындағы эшмәкәрлеге махсус тикшерелеп, бер ниндәй ҙә дөғүә белдерелмәүе һәм уның нацистар менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше булмауы хаҡында яҙма документ булыуын әйтеп үтте. Совет осоронда сит илдәрҙә эмиграцияла йәшәгән шәхестәр именлек органдары иғтибарынан ситтә ҡалмаған, ғәйепле тип табылғандарҙы хөрмәтләү бөтөнләйгә мөмкин дә булмаҫ ине. Тарих фәндәре докторы Марат Ҡолшәрипов отставкалағы КГБ генералы Лев Соцковтың совет разведкаһы досьеһынан алынған материалдарға нигеҙләнгән китабында Зәки Вәлидигә бәйле бер фәһемле ваҡиға хаҡында иҫкә алыуын билдәләп үтте. Баҡһаң, 1951 йылда халыҡ-ара ғилми конференцияларҙың береһендә ҡатнашҡан совет ғалимы Ә.-З. Вәлиди менән танышып, уның ғилми хеҙмәттәренең юғары баһаланыуын белдереп, донъя кимәлендә танылған ғалимдың тыуған иленә ҡайтыу мәсьәләһе тураһында һүҙ ҡуҙғата. Әлбиттә, ошо ғалим КГБ рөхсәтенән башҡа Ә.З.Вәлиди менән бәйләнешкә инергә баҙнат итмәҫ ине.

БР Фәндәр академияһы академигы Фәнил Фәйзуллин ошо тарихи шәхесебеҙ йөҙөнә яла яғыусыларҙың федерализм нигеҙҙәренә ҡаршы сығыуын, Рәсәйҙе яңынан унитар дәүләткә әйләндереү маҡсатын алға һөрөүҙән билдәләп, Ә.З. Вәлидиҙе яҡлауҙың Рәсәйҙе яҡлауға тиң икәнлеген белдерҙе. БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Архив эштәре идарағы начальнигы Әхмәт Хисмәтуллин хәҙерге Рәсәйҙә милли ҡиммәттәр менән бер рәттән, халыҡ геройҙарын да юҡҡа сығарырға тырышыусыларҙың йәмғиәт өсөн үтә хәүефле булыуына баҫым яһаны. "Төрки халыҡтар өсөн берҙәй ҡәҙерле булған Әхмәт-Зәки Вәлиди Туғандың исемен бысратыу Александр Невскийға йәиһә Петр I яла яғыу менән бер", - тине ул.

Башҡортостан рустары Соборы башҡарма комитеты рәйесе Борис Самородов, "Аҡ Бата" ҡаҙаҡ милли мәҙәниәте үҙәге президенты Мәргүбә Шумова, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе вәкиле, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Рәил Әсәҙуллин шулай уҡ депутат Назаровтың ҡылығын ҡаты тәнҡитләп, уның шәхси эше партия буйынса коллегалары тарафынан ҡаралып, яуаплылыҡҡа тарттырылырға тейешлеген билдәләне.

Эйе, ысын тарих бер тапҡыр ғына яҙыла, ә уны түҙға яҙмаған уйҙырмалар менән алмаштырырға теләүселәрҙең урыны күптән билдәле инде - уларҙың һәммәһе лә тарих сүплегенә һеперелеп түгеләсәк.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# АТАЙЫМДЫ ХӘТЕРЛӘГӘНДӘ...

Атайыма аңлы рәүештә тәүге һорауымды биргәндә, минә биш йәш ине. Беҙ Баязет Соғанаға бинаһындағы китапхана бүлмәһендә инек. Атайым, күҙлеген маңлайына күтәрә биреп, баҫып торған көйө китап биттәрен ҡарай. Мин унан: "Һинә нисә йәш?" - тип һораным. "Күп, хәтерендә ҡалмаҫ!" - тип яуапланы ул. "Барыбер әйт", - тип ныҡышҡас, ул: "Илле биш", - тине. Тимәк, был 1946 йылда булған.

Был ваҡытта мин атайымдың билдәле кеше булыуына төшөнә башлағайным. Уның ошо билдәлелеге арҡаһында төрмәгә эләгеүе хаҡында ла белә инем. Тап шул ваҡытта беҙҙең өйгә "ағайҙар" килеп йөрөй башланы. Улар СССР армияһында һуғышта ҡатнашып, немецтарға әсирлеккә төшкән булған, уларҙы Советтарға ҡаршы сығырға өгөтләгәндәр. Минең балалыҡ хәтеремдә ҡалғанса, уларҙың ул саҡтағы төп теләге - "донъя менән танышыу" ине. Улар русса белә, немецса һөйләшергә өйрәнгән, әммә ниндәй ҙә булһа дипломдары юҡ ине. Улар үҙҙәренә Төркиәлә тәҡдим ителгән эште кимәлдәре һәм мөмкинлектәренә тап килмәй, тип, яҡшыраҡҡа өмөт итә ине. Һуңынан был "ағайҙар" аҡрынлап Төркиәне ташлап китте. Ошо ситтән килеүсе йәштәр араһында атайымдың яҡташтары - башҡорттар ҙа бар ине. Йыраҡтан килгәйнеләр, ҡайҙалыр йыраҡҡа сығып киттеләр. Ошо кешеләр менән аралашып, атайымдың ниндәйҙер яңы тормошҡа сумыуын аңлараҡ хәлдә инем. 1951 йылда атайым Көнсығышты өйрәнеүселәрҙең XXII Халыҡ-ара конгресын әҙерләү менән шөғөлләнгәндә ошо "ағайҙар" уға ҡайһы бер эштәрендә ярҙам итте. Атайым яғынан беҙҙең туғандарыбыҙ юҡ ине, һәм ошо яҡташтар беҙҙең өйөбөҙгә туғанлыҡ йылыһын индерҙе. Әммә атайымдың улар менән беҙгә таныш булмаған бик күп һүҙҙәрҙе ҡулланып һөйләшеүе, ошо аҙ аңлайышлы булған әңгәмәләр барышында үҙе бөгөн йәшәгән мөхитте бөтөнләйгә онотоп тороп, беҙҙән алыҫ булған икенсе донъяға сумыуы минең сабый хәтеремә бигерәк тә ныҡ уйылып ҡалған. Атайымдың элекке уҡыусыларының береһе, профессор Әнүәр Конуҡчу бер саҡ былай тип әйткәйне: "Беҙ остазыбыҙҙы тыуған илен һағыныуынан бер ҡасан да арындыра алманыҡ".

Атайымдың үлеменә 24 йыл үтеүгә, Аллаһы Тәғәлә беҙгә уның тыуған иленә ҡарата бөтмәҫлек һағышын аңлай алыу мөмкинлеген бирҙе. 1989 йылда Берлин стенаһы емерелгәс, 1991 йылдың декабрендә Коммунистар партияһы тыйылып, Советтар Союзы тарҡалғас, үҙебеҙҙең йортобоҙ тәҙрәһенән Көнсығыш Европала һәм Азияла, бигерәк тә төркиҙәр донъяһында барған гигант үҙгәрештәрҙе күҙәтә килеп, мин атайымдың һәм үҙемдең Башҡортостан менән бәйле икәнебеҙҙе күрҙем.

**Иҫәнбикә ТУҒАН,**
**тарих фәндәре докторы, Анкараның Урта Көнсығыш техник университеты профессоры.**
**(Ә.М. Юлдашбаевтың "Билдәле һәм билдәһеҙ Зәки Вәлиди" китабынан).**

✓ *Хөрмәтле министрыбыҙ статистика мәғлүмәттәрен яҡшы белһә, ошолай тип әйтмәҫ ине. Ни өсөн? Эйе, бала табыусы әсәләр һаны күҙгә күренеп артты, әммә бер әсәгә тура килгән балалар һаны артманы.*



# Иҫәпте лә, йәки Статистика хеҙмәте

**Дәүләт статистика хеҙмәтенең күҙгә күренмәгән көндәлек эшмәкәрлегенән башҡа, Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кеүек дәүләт әһәмиәтендәге сараларҙы әҙерләүе һәм уҙғарыуы һәр саҡ йәмғиәт иғтибарының үҙәгендә була. Ошо хаҡтағы әңгәмәбеҙҙә Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы етәксеһе урынбаҫары Рөстәм ҒАТАУЛЛИН һәм иҡтисад фәндәре кандидаты, БР Президенты ҡарамағындағы Башҡорт дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы профессоры Рәфҡәт ГАЛИН ҡатнашты.**

**Тәү ҡарамаҡҡа, статистика эшмәкәрлеге әллә ни ҡыҙыҡ тойолмай, ул "йәнһеҙ" һандарҙан хасил булған таблицаларҙы төҙөүҙән ғибәрәт бер эш сифатында ҡабул ителә. Шул уҡ ваҡытта теге йәки был осорҙа ҡайһы илдә күпме халыҡ йәшәүен, тыуым һәм үлем динамикаһын, йәмғиәттә ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙар һанының нисбәтен, ғүмер оҙайлығын, тауар хаҡтары торошон һәм башҡа шундай мәғлүмәттәр гәзит-журнал биттәрендә баҫылһа, бик күптәребеҙҙең иғтибарын йәлеп итә. Бындай мәғлүмәт уйландыра ла, шатландыра ла, хатта хафаландыра ла ала. Дәүләт идара итеү системаһындағы үҙгәрештәр статистика хеҙмәтендә сағылыш табамы?**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Бынан 24 йыл элек статистика органдарына эшкә килгән саҡта беҙ ғәмәлдә дәүләт идара итеү системаһы өсөн генә эшләй инек. Ул саҡта төрлө өлкәләрҙә статистик мәғлүмәттәрҙе йыйыу, эшкәртеү, анализлау һәм эш һөҙөмтәләрен тейешле дәүләт органдарына еткереү - беҙҙең төп бурысыбыҙ ине. Күп осраҡта беҙҙә тупланған мәғлүмәттәр киң йәмәғәтселеккә барып етмәне. Яңы заман статистика өлкәһенә лә үҙгәрештәр алып килде: бөгөн беҙ йәшәйешебеҙҙең торошон һәм сифатын сағылдырған күрһәткестәрҙе бар халыҡҡа ваҡытында еткереп торорға бурыслыбыҙ. Бөгөнгө статистиканы тормошобоҙҙоң ниндәйерәк булыуын, уның үҙгәреш динамикаһын ярайһы уҡ аныҡ сағылдырып тороусы мәғлүмәт көҙгөһөнә тиңләп була.

**Р. ГАЛИН:** Йәмғиәттә лә, дәүләттә лә туҡтауһыҙ үҙгәрештәр бара, йәшәйештең төрлө өлкәләрен көйләүсе дәүләт функциялары ла яңырып тора. Ижтимағи тормошта, милекселек, иҡтисад, сауҙа, демография, фән, мәҙәниәт, мәғариф кеүек йәмғиәт торошо менән бәйле өлкәләрҙә ниндәй үҙгәрештәр булыуын билдәләүсе объектив мәғлүмәттәр ил менән идара итеү органдары өсөн бик мөһим. Дәүләтте бындай мәғлүмәттәр менән статистика хеҙмәте тәьмин итә. Әйтергә кәрәк, совет осоронда статистикаға артыҡ иғтибар бирелмәне, уның йәмғиәттәге роле лә түбәнерәк булды. Мәҫәлән, бер тигеҙ эш хаҡы алыусы хеҙмәткәрҙәрҙең башҡа килем сығанаҡтары булмағас, статистика хеҙмәте өсөн был өлкәне айырым өйрәнеү кәрәк булманы. Кешеләрҙе эш менән тәьмин итеү мәсьәләһе, эшһеҙлек проблемалары махсус ҡуйылманы, сөнки бар милек дәүләт ҡарамағында булғас, эш урындары билдәле бер дәүләт ҡарарҙары нигеҙендә булдырыла ине. Ғөмүмән, ул саҡтағы статистика органдары статиканы, йәғни артыҡ үҙгәрмәй торған тороҡло күренеш-факторҙарҙы өйрәнһә, бөгөн үҫеш динамикаһын билдәләү алғы планға сығарыла. Элек статистика аша теге йәки был өлкәләге күрһәткестәрҙең алдан билдәләнгән сиктәрҙә булыу-булмауын белергә тырышһалар, бөгөн был өлкәнең функциялары киңәйә бирҙе: хәҙер статистика мәғлүмәттәре динамика, үҙгәреш, үҫеш торошо күрһәткестәренә төплө анализ биреү өсөн кәрәк.

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Ил граждандарының статистиканы теге йәки был өлкәлә тупланған һан күрһәткестәре рәүешендә аңлауы хаҡында һүҙ булды. Был ысынлап та шулай, сөнки йәмғиәттә һәм дәүләттә барған үҙгәреш күрһәткестәрен өйрәнеүҙән башҡа статистика ла булмаҫ ине. Әммә был төшөнсәнең башҡа мөһим яҡтары ла бар. Беренсенән, статистика, махсус фән тармағы булараҡ, йәмғиәт һәм дәүләт йәшәйеше өсөн мөһим күрһәткестәрҙе күҙәтеү, йыйыу һәм теркәүҙе фәнни нигеҙләү ысулдарын, фән телендә әйткәнсә, уның методологияһын барлыҡҡа килтерә. Икенсенән, статистика - ғәмәли эшмәкәрлек, һәм ул үҙе өйрәнә торған күрһәткестәрҙе көн һайын йыйыу һәм туплау, билдәле формаларға һалыу менән дә мәшғүл.

Әйтергә кәрәк, йәмғиәт торошон статистика хеҙмәте аша өйрәнеүҙе дәүләт үҙенең иң мөһим функцияларының береһе рәүешендә тулыһынса үҙ өҫтөнә алған. Уйлап ҡарағыҙ: кеше тыуғандан алып ер ҡуйынына ингәнсе уның йәшәйешендә булған барса үҙгәрештәр ҙә теркәлеп бара, һәм статистика өсөн йәмғиәттең һәр бер өлкәһен, ул иҡтисад, социаль өлкә, мәҙәниәт, фән, мәғариф, демографик һәм этник процестар, һаулыҡ һаҡлау, йәиһә башҡа бер даирә булһынмы, объектив сағылдырған күрһәткестәрҙе ваҡытында теркәй барыу фарыз.



*Башҡорттар Иван Грозный заманынан бирле килешеү нигеҙендә Рус дәүләтенә үҙ биләмәләренә ярашлы яһаҡ түләргә тейеш була. Был осраҡта яһаҡ йыйыусыларҙың башҡорттарҙың хужалығы тураһында ниндәйҙер мәғлүмәттәргә эйә булып, түләүҙәр буйынса теркәү алып барыуы билдәле.*

**Р. ГАЛИН:** Статистиканы һанға һуҡмау, уны белмәү идара итеүҙең һөҙөмтәле булмауына, йәиһә объектив һығымталар эшләй алмауға килтерә. Бына Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Татьяна Голикова әсәлек капиталы индереү, Хөкүмәтттең башҡа саралары һөҙөмтәһендә тыуым кимәленең ныҡ артыуы тураһында һөйләне. Ә бының асылы бөтөнләй икенсе нәмәлә бит. Хөрмәтле министрыбыҙ статистика мәғлүмәттәрен яҡшы белһә, ошолай тип әйтмәҫ ине. Ни өсөн? Эйе, бала табыусы әсәләр һаны күҙгә күренеп артты, әммә бер әсәгә тура килгән балалар һаны коэффициенты артманы. Республикабыҙҙа 2008 йылда 54,5 мең бала тыуҙы, был һәйбәт күрһәткес, әммә репродуктив, йәғни бала тыуҙырыу йәшендәге әсәләрҙең дөйөм һаны артыуын иҫәпкә алырға кәрәк бында.

**Статистика хеҙмәтенең килеп сығышы тураһында ни әйтер инегеҙ?**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Статистиканың тарихи тамырҙары боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Йәшәү өсөн мөһим булған әйбер-күренештәрҙе күҙәтеү һәм теркәп барыу ихтыяжы аҙмы-күпме аң сифатына эйә булған кешеләрҙә тәү тормош дәүерендә үк яралған, тип уйларға ерлек бар. Бына ошо ихтыяж кешеләрҙә иҫәпләү, күләмде һан аша белдерә алыу һәләтен үҫтергән. Тәү тормош осоро кешеләренең таш ҡаяларға соҡоп ҡалдырған һүрәттәре ошо хаҡта һөйләмәйме ни? Һунар күренештәре теркәлгән һүрәттәр аҫтына соҡоп ҡалдырылған таяҡтар ошо фекерҙе раҫлай, тип уйлайым. Быға ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла була, әммә бына нимә мөһим: йәмғиәттең бөгөнгө торошон асыҡлаусы мәғлүмәттәр әлеге заманда йәшәүселәр өсөн генә түгел, киләсәк быуындар өсөн дә кәрәк.

"Статистика" төшөнсәһе латин телендә "ниҙендер ҙә булһа билдәле бер торошон" аңлатҡан "статус" һүҙенән алынған. Шуныһы ҡыҙыҡ: был термин 1746 йылда немец ғалимы Г. Ахенваль тарафынан "дәүләтте өйрәнеү" төшөнсәһе урынына ҡулланыла башлай. Бында башлыса дәүләттең сәйәси һәм дөйөм торошо тасуирланһа, Англияла 100 йылға яҡын элегерәк "Сәйәси арифметика" фәне өйрәнелә башлай, был йүнәлеш хәҙерге статистикаға яҡыныраҡ. Тарихи статистиканың теория һәм ғәмәли иҫәпкә алыу менән бәйле ике йүнәлеше XIX быуатта бергә ҡушылып, берҙәм фән тармағын барлыҡҡа килтерә. Статистиканың фән булараҡ үҫешенә һәм ҡулланылышына Рәсәй ғалимдары ла ҙур өлөш индерә. Мәҫәлән, XIX быуат башында гимназияларҙа, башҡа уҡыу йорттарында "статистика" предметы мотлаҡ рәүештә өйрәнелеүсе фәндәр рәтендә тора. А.С. Пушкин уҡыған лицей-музейҙа булғанда уның заманында сығарылған "Статистика" дәреслеген күреү насип булғайны. Уйлап ҡараһаң, фән һәм технологиялар заманында ватандаштарыбыҙҙың статистика өлкәһендә элементар белемдәргә лә эйә булмауына ғәжәпләнмәй булмай. Бәлки, беҙҙең иҡтисад өлкәһендә артта ҡалыуыбыҙҙың сәбәптәренең береһе статистик белем һәм ғилемгә илтифат етмәүенәндер ул.

**Һеҙ башлыса һан күрһәткестәренән хасил булған статистика фәне һәм хеҙмәтенә тарихилыҡ та хас, тип әйтәһегеҙме?**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Статистика мәғлүмәттәре һәр саҡта ла билдәле бер ваҡыт менән бәйле, һәм улар нигеҙендә һәр дәүергә бик аныҡ характеристика биреп була. Ваҡыт - йәмғиәт йәшәйешенең бер туҡтауһыҙ үҙгәреп тороуының сағылышы, ә статистика ниндәйҙер ваҡыт арауығында булып уҙған тормош күрһәткестәрен теркәй барып, ошо йәмғиәттә ниндәй үҙгәрештәр булыуы хаҡында объектив фекер тупларға мөмкинлек бирә.

**Р. ГАЛИН:** Тарихта һәр нәмәнең тәү башланғысы була. Тәү тормош осоро кешеләре үҙ ҡәбиләһенең аҙ һанлы булыуының күрше йәшәгән күп һанлы ҡәбилә менән сағыштырғанда үҙҙәре өсөн насарыраҡ икәнен аңлай башлаған икән, был ошо кешеләргә йәшәү рәүешен үҙгәртеү өсөн ерлек булдыра. Йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алыу - тарихи күренеш.

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Бына ошо йәмғиәт өсөн бик кәрәкле эште Рәсәй дәүләте XIX быуат башында үҙ ҡарамағына ала. Билдәле булыуынса, илебеҙ төбәктәрендә иң беренсе дәүләт статистика органы - губерна статистика комитеты 1835 йылдың 21 мартында (иҫке стиль буйынса - 9 мартта) Өфө ҡалаһында булдырыла. Башҡортостан статистиктары 175 йыл буйына үҙҙәренең профессиональ бурыстарын теүәл һәм юғары кимәлдә үтәп килә. Ошо ваҡыт арауығында бер нисә быуын статистика белгестәре үҫеп сығып, ил һәм төбәк кимәлендәге бик күп башланғыстарға нигеҙ һалған. Башҡортостандың милли музейын, Ә.З. Вәлиди исемендәге милли китапханаһын, республикабыҙҙың архив хеҙмәтен булдырыуҙа уларҙың өлөшө ҙур. Әйткәндәй, Өфө земство идараһының статистика бүлегендә эшләп киткән Цюрупа, Попов, Красильников, Шмидт, Обухов кеүек белгестәр 1918 йылда РСФСР-ҙың статистика хеҙмәтен тергеҙгән.

**Башҡорттар Иван Грозный заманынан бирле килешеү нигеҙендә Рус дәүләтенә үҙ биләмәләренә ярашлы яһаҡ түләргә тейеш була. Был осраҡта яһаҡ йыйыусыларҙың башҡорттарҙың хужалығы тураһында ниндәйҙер мәғлүмәттәргә эйә булып, түләүҙәр буйынса теркәү алып барыуы билдәле.**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Ни эшләптер, статистиканы һалым түләү менән бәйләп ҡарау киң таралған. Халыҡтан берәй төрлө стат-мәғлүмәттәр йыя башлаһалар, ысынлап та, һалым тураһында имеш-мимештәр таралыусан. Хәҙерге статистика айырым шәхестәр, уларҙың хужалығы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе асыҡ ҡулланыуға сығармай, ә улар нигеҙендә бөтә халыҡ, ил торошо тураһында дөйөм күрһәткестәрҙе йәмғиәт һәм дәүләт органдары иғтибарына тәҡдим итә. Ғөмүмән, статистика хеҙмәте тарафынан йыйылған мәғлүмәттәрҙе ҡулланыусылар даирәһе бик киң: идара итеү органдары, фән, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары, ойошмалар һәм предприятиелар, киң матбуғат саралары, һәм, әлбиттә, беҙҙең граждандарыбыҙ. Һәр ойошма, һәр айырым кеше үҙенә кәрәкле мәғлүмәттәр буйынса статистика органдарына мөрәжәғәт итеү хоҡуғына эйә.

**Дәүләттә күпме кеше йәшәүен, теге йәки был халыҡтың иҫәбен белеү элек-электән мөһим мәғлүмәттәр иҫәбенә ингән. Рәсәйҙә айырым сословие кешеләрен иҫәпкә алыу XVIII быуатта башланып, беҙҙең көндәргә "ревиз сказкалары" тип аталған документтар рәүешендә килеп еткән. Башҡорттар араһында тәүге дүрт ревизия уҙғарылмай, тәүге мәғлүмәттәр 1795 йылға ҡарай. Ғөмүмән, башҡорттар үҙҙәрен иҫәпкә алыуҙы бик өнәп тә бөтмәгән...**

**Р. ГАЛИН:** Халыҡ иҫәбен алыу ул заманда уҙғарылған ревизия кампанияларының төп маҡсаты булмай. Ревизия материалдарында барса халыҡ та иҫәпкә алынмай, һалым түләүсе сословие вәкилдәре генә теркәлә. Был осорҙа һалым айырым хужалыҡтарҙан түгел, ә йән башына ҡарап иҫәпләнә башлай. Әлбиттә, үҙҙәренең азатлығы өсөн көрәш алып барған башҡорт халҡы үҙ иңенә һалынасаҡ һалым күләменең артыуына риза булмаған.

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Административ иҫәп алып барыу Петр I дәүерендә үк индерелә. Ә ревизия материалдарын статистик иҫәп алыу мәғлүмәте сифатында

✓ ***Яңы тыуған балаларҙың 24 процентын рәсми никахта тормаған ҡатындар таба, ә беренсе бала тапҡан әсәләрҙең уртаса йәше 20-24 йәштән 25-29 йәшкә күсә бара.***

# ҺАНДА ЛА БУЛАЙЫҠ,

## халыҡ иҫәбен алыуға әҙерләнә

ҡарап булмай, улар оҙайлы ваҡыт дауамында туплана. Бындай мәғлүмәттәрҙе анализлап, дөйөмләштереү ҙә талап ителмәгән. Әммә был материалдар бик ҡиммәтле, сөнки уларҙа һәр тарихи осорға ҡараған беренсел мәғлүмәттәр сағылдырылған. Башҡорттарҙың ревизия уҙғарыуға ҡаршылыҡ күрһәтеү-күрһәтмәүе тураһында мин аныҡ ҡына әйтә алмайым, әммә тәүге 4 ревизия материалдарының булмауына ышанмайым. Бәлки, улар Рәсәйҙең боронғо акттары архивында, йәиһә икенсе бер архивтарҙа һаҡланалыр. Әүҙемерәк эҙләргә кәрәктәр, тип уйлайым.

Тарихи материалдар хаҡында һүҙ барғанда бына нәмә мөһим: төрлө йылдарға ҡараған документтарҙағы мәғлүмәттәрҙе статистик анализ аша дөйөмләштереп, билдәле кимәлдә айырым төбәктәрҙә йәшәүсе халыҡ тормошоноң динамикаһын өйрәнергә була. Мәҫәлән, мин үҙемдең тыуған ауылым һәм яҡындағы бер нисә ауыл буйынса мәғлүмәттәрҙе өйрәнеп, ошонда йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙ тормошонда булған үҙгәрештәрҙе билдәләй алдым. Бындай анализ күпкә киңерәк ареалда ла эшләп булыр ине. Ғөмүмән, архивтарҙа һаҡланып ҡалған тарихи документтар аша төрлө дәүерҙәргә ҡараған статистик мәғлүмәттәрҙе тергеҙеп була. Беҙҙең архивтарыбыҙ ошо йәһәттән бик бай. Һуңғы ике быуат дауамында йыйылған документтар беҙҙең ғалимдарыбыҙ өсөн үтә ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Уларҙы заманса электрон нигеҙгә һалыу - көн талабы. Миненсә, халыҡ иҫәбен алыу буйынса барлыҡ материалдар, шулай уҡ ревиз сказкалары ла һәр бер теләгән кешегә таныша алыу мөмкинлеге биргән электрон архивҡа индерелергә тейеш.

**▸ Һуңғы йылдарҙа демографик көрсөк проблемаһы Рәсәй зыялыларын ғына түгел, дәүләт етәкселеген дә борсоуға һала. 2010 йылда уҙғарыласаҡ халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек барғанда ошо көнүҙәк проблеманы урап үтеп булмай. Илдең демографик упҡынға табан барыуы, халыҡ һанының даими кәмеүе хаҡында пессимистик фекерҙәр киң мәғлүмәт сараларында йыш сағыла. Рәсәй киләсәгенә ысынлап та көсәйә барған депопуляция хәүефе янаймы?**

**Р. ГАЛИН:** Бөгөнгә демографик проблемаларҙы инҡар итергә теләмәйем, әммә күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән бер фәтүә лә тапмайым. Дәүләт бар, йәшәйеш бар, халыҡ бар - тимәк, тормош дауам итә. Кешеләрҙә йәшәү теләге һүнмәһә, ил-йорт та бөтмәҫ. Демографтарҙың да, идара итеүсе органдарҙың да тик күләм күрһәткестәренә - тыуым һәм үлем нисбәтенә, халыҡтың дөйөм иҫәбенә иғтибар итеүе пессимистик һығымталарға ерлек бирә. Рәсәйҙәге дөйөм хәлдә Башҡортостан территорияһындағы шарттар менән сағыштырыу икенсерәк фекер тыуҙыра. Мәҫәлән, Рәсәйҙә 1 квадрат километр майҙанға 8 кеше тура килһә, Башҡортостанда - 28. Күрәһегеҙ, айырма бик ҙур, һәм Башҡортостандың кешеһеҙ ҡалыуын күҙ алдына килтереп булмай. Унан һуң, демографик процестарҙың үҙенсәлеген иҫәпкә алыу зарур. Тыуым кәмеүе тенденцияһы хәҙер байтаҡ илдәргә хас. Башҡортостанда 2008 йылда 1000 кешегә 13,4 яңы тыуған бала тура килһә, был күрһәткес Европа илдәренекенән дә, Рәсәйҙекенән дә юғарыраҡ.

**▸ Демография торошо илдең иҡтисади хәле менән туранан-тура бәйләнмәгән, тип әйтергә теләйһегеҙме?**

**Р. ГАЛИН:** Тап шулай. Демографик процестарҙың үҙ ҡанундары һәм ағымдары бар, һәм уларҙы төрлөсә баһаларға була. Матбуғатта дәүләт тарафынан илдәге тыуым торошон көйләүгә йүнәлтелгән сараларға күп иғтибар бирелә, уларҙың һәйбәт һөҙөмтә биреүе юғары баһалана. Әммә демография өлкәһендә сәйәси факторҙы хәл иткес, тип нарыҡлап булмай. Белеүегеҙсә, Бөйөк Ватан һуғышынан һуң илебеҙҙә тыуым ныҡ арткайны, әлеге ваҡытта шул быуындан 80-се йылдарҙа тыуғандар үҙҙәре репродуктив йәшкә етте. Ул саҡта республика буйынса тыуым 75-80 меңгә еткәс, хәҙерге йәш әсәләрҙең дөйөм һаны ла байтаҡҡа артып, тыуым кимәле 50 меңдән артып китте. Әммә был демографик проблеманың үҙенән-үҙе хәл ителеүен аңлатмай, сөнки айырым ғаилә кимәлендә тыуым артманы. Ғөмүмән, бөгөнгө йәш ғаилә бала табыуҙы үҙенең киләсәген билдәләүсе фактор итеп ҡарамай. Матди яҡтан ҡарағанда ла киреһенсә килеп сыға: ауыл кешеләренең матди хәле бигүк яҡшы булмаһа ла, күп балалы ғаиләләр башлыса ауылда йәшәй, ә ҡалаларҙа етеш, мул тормошта көн иткәндәр ғаиләләрен бер, йәиһә ике баланан арттырмай. Ҡала мөхитендә ата-әсә берҙән-бер балаһын яҡшыраҡ тәьмин итеп, һуңынан престижлы уҡыу йорттарына ебәреп уҡытыуҙы өҫтөн күрә. Ҡулланыусылар йәмғиәте психологияны кешенең маҡсатын рухи ерлектән айырып, затлы кейемдәргә, ҡиммәтле автомобилдәргә, элиталы торлаҡҡа, зауыҡһыҙ, әммә арбағыс һәм аҙҙырғыс күңел асыу мөхитенә йүнәлтә. Был хатта чиновниктар даирәһенә лә үтеп инде, уларҙың йөҙәр мең доллар торған ҡул сәғәттәре "абруй" танытмаһы ролен үтәй. Социаль яҡтан иң уңышлы тип танылған Швейцария, Германия, Голландия, Дания кеүек илдәрҙә лә тыуым бик түбән, Европа ғаиләләре башлыса үҙҙәренең матди хәлен тотороҡло һәм юғары кимәлдә тотоуҙы алғы планға ҡуя.

**▸ Шул уҡ ваҡытта демографик үсештең дәүләт тотороҡлого өсөн мөһим фактор булыуын иҫәптән сығарырға ярамайҙыр бит?**

**Р. ГАЛИН:** Демография өлкәһендә "Һәр йөҙ һыйырҙан мөмкин тиклем күберәк быҙау алырға!" лозунгыһын ҡулланып булмай. Ғөмүмән, һәр ғаилә күпме бала тәрбиәләргә теләй, шунса бала таба алһын өсөн минималь шарттарҙың булыуын бер кем дә инҡар итмәй. Һис шикһеҙ, иркен торлаҡ, етеш тормош итеү мөмкинлеге биргән эш, ташлама-льготалар системаһы күп балалы ғаиләләрҙең артыуына булышлыҡ итер ине. Әлбиттә, бында этностың тарихи психологияһын иҫәпкә алырға кәрәк. Мәҫәлән, башҡорт мөхитендә татарҙарҙыҡына ҡарағанда тыуым юғарыраҡ, сөнки бында тарихи традициялар, мәҙәниәт, ғаиләгә ҡараш күпкә тотороҡлораҡ һәм йоғонтолораҡ. Һуңғы йылдарға тиклем башҡорттар үҙ ауылдарында йәшәүҙе өҫтөн күрҙе, бәләкәй башҡорт ҡалаларында йәшәүселәр ҙә традицион ғөрөф-ғәҙәттәрен, ғаилә мәҙәниәтен үҙгәртеп бармай. Тарихи традицияға тоғролоҡ этностың мәҙәниәтен дә, үҙен дә һаҡлап ҡалыу өсөн иң ҡулай шарт.



***Халыҡ иҫәбен алыу ул заманда уҙғарылған ревизия кампанияларының төп маҡсаты булмай. Ревизия материалдарында барса халыҡ та иҫәпкә алынмай, һалым түләүсе сословие вәкилдәре генә теркәлә. Был осорҙа һалым айырым хужалыҡтарҙан түгел, ә йән башына ҡарап иҫәпләнә башлай. Әлбиттә, үҙҙәренең азатлығы өсөн көрәш алып барған башҡорт халҡы үҙ иңенә һалынасаҡ һалым күләменең артыуына риза булмаған.***

Демографик процестарҙы бар тәрәнлегендә аңлай алыр өсөн төплө анализ яһай алыу фарыз. Улар үҙгәреп тора, элек һис күҙалланмаған һөҙөмтәләргә килтерә. Бына ике факт: яңы тыуған балаларҙың 24 процентын рәсми никахта тормаған ҡатындар таба, ә беренсе бала тапҡан әсәләрҙең уртаса йәше 20-24 йәштән 25-29 йәшкә күсә бара. Был факттар халыҡтың традицион мәҙәниәтенең үҙгәреш кисереүен күрһәтеп тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғаилә феноменына яңы тарихи шарттарҙа төплө рәүештә өйрәнелмәй, ә беҙ демографик мәсьәләне тик сәйәси юл менән хәл итергә өмөтләнәбеҙ. Демографик кризистың икенсе полюсында илебеҙҙә үлем кимәленең үтә юғары булыуы тора. Ә был өлкәлә хәл ителмәгән проблемалар бихисап. Сабыйҙар, ир-ат үлеменең юғары булыуы, суицид буйынса донъяла өсөнсө урында булыуыбыҙ - бик хәүефле күрһәткес. 20 йәштән 34 йәшкә тиклемге төркөмдәрҙә ир-ат үлеме ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡынан 3 тапҡырҙан ашыуға юғарыраҡ. Ғөмүмән, демографик күрһәткестәр бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән, һәм уларҙы комплекслы анализлай алыу мотлаҡ.

**▸ Илебеҙ халыҡтарының хәҙерге көндәге демографик торошона сираттағы халыҡ иҫәбен алыу асыҡлыҡ индерәсәк. Ошо дәүләт кимәлендәге ҙур эшкә әҙерлек нисек бара?**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Республикабыҙҙың һәр граждан ҡатнашасаҡ ошондай эшкә беҙҙә бик ҙур иғтибар бүленә. Халыҡ иҫәбен алыу 2010 йылдың 14 -25 октябрендә уҙғарыласаҡ, ә уға әҙерлек эштәре 2006 йылда уҡ башланды. Республика Хөкүмәте ошо мәсьәлә буйынса ҡарар ҡабул итте, Премьер-министр етәкселегендәге республика комиссияһы төҙөлдө, шулай уҡ район һәм ҡалалар кимәлендә лә комиссиялар булдырылды.

Уҙған йылдың йәй айҙарында республикабыҙҙың ауыл һәм ҡалаларында халыҡ йәшәгән барса йорттарҙың исемлеге төҙөлдө, уларҙа теркәлгән кешеләрҙең иҫәбе барланды. Ошо мәғлүмәт нигеҙендә урындарҙа халыҡ иҫәбен алыу буйынса ойоштороу пландары төҙөлдө. Ошо планға ярашлы халыҡ йәшәгән һәр пунктта иҫәпләү, инструктор һәм иҫәпкә алыу участкалары төҙөлдө. Һәр иҫәп алыусы уртаса алғанда 400 кешене теркәргә бурыслы, 4 иҫәп алыусыға 1 инструктор-контролер тәғәйенләнә, 4 инструкторҙың эшенә иҫәпкә алыу участкаһы мөдире етәкселек итә. Әлеге ваҡытта республика буйынса ойоштороласаҡ участкаларҙың дөйөм һаны һәм ошо эшкә күпме кеше йәлеп ителәсәге аныҡлана. Дөйөм алғанда, халыҡ иҫәбен алыу эшендә 18 мең кеше ҡатнашасаҡ.

Календарь планда ҡаралған эштәр үҙ ваҡытында атҡарылып бара, урындарҙағы комиссиялар менән бәйләнеш тотабыҙ, ундағы хәлде өйрәнәбеҙ, консультациялар уҙғарабыҙ, кәрәк булһа, төҙәтмәләр индерәбеҙ. Халыҡ менән даими бәйләнештә булған торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, миграция хеҙмәте учреждениеларынан, берҙәм касса-иҫәп үҙәктәренән алған материалдарҙы файҙаланып, үҙебеҙҙең мәғлүмәт базаһын аныҡлайбыҙ. Беҙҙең заказ буйынса картографик материалдар, халыҡ йәшәгән пункттарҙың план-схемалары төҙөлдө, улар ҡулланыуға әҙер. Район-ҡала кимәлендәге хеҙмәткәрҙәр июль-август айҙарында, ә иҫәп алыусылар сентябрҙә махсус ойошторолған өйрәтеү курстарына саҡырыласаҡ. Әлеге ваҡытта беҙ буласаҡ иҫәпселәр исемлеген төҙөүгә лә тотондоҡ. Элекке халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашҡан кешеләрҙе йәлеп итәбеҙ, шулай уҡ уҡыу йорттары студенттары ла беҙҙең иҫәпселәребеҙ рәттәрен тултырасаҡ. Баш ҡалабыҙ Өфөлә генә лә 4600 тирәһе иҫәпсе кәрәк буласаҡ. Йәштәребеҙ ошо дәүләт кимәлендәге эшкә үҙ өлөшөн индерер, тип өмөтләнәбеҙ.

**▸ Халыҡ иҫәбен алыу анкеталарында ниндәй мәғлүмәттәр теркәләсәк?**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Граждандарға биреләсәк һорауҙар, йәғни иҫәп алыу программаһы 2008 йылда уҡ һынап ҡарау маҡсатында уҙғарылған иҫәпкә алыу барышында тәҡдим ителгәйне, 2009 йылдың февралендә ул Бөтә Рәсәй кәңәшмәһендә лә тикшерелде. Декабрь айында Рәсәй Хөкүмәте халыҡ иҫәбен алыу ҡағыҙҙарының рәсми бланкыларын раҫланы. Граждандар үҙҙәренең шәхестәренә ҡараған (тыуған ваҡыты, йәшәгән урыны, белеме, милләте, теле, ғаилә хәле, йәшәү сығанаҡтары һ.б.) һәм торлаҡ шарттары буйынса мәғлүмәттәр бирәсәк.

**▸ Кешенең милләтен, туған телен билдәләү буйынса бәхәсле моменттар юҡмы?**

**Р. ҒАТАУЛЛИН:** Халыҡ иҫәбен алыу илдә йәшәүсе граждандарҙың дөйөм һанын һәм милли составын билдәләүҙән генә ғибәрәт түгел. Дәүләт өсөн халыҡ йәшәйешенең сифат күрһәткестәре лә мөһим, шуның өсөн билдәләнгән 25 пункт буйынса мәғлүмәт алынасаҡ. Һәр аңлы кеше үҙе һәм ғаиләһе тураһында ысынбарлыҡҡа тап килгән мәғлүмәтте иркеле рәүештә белдерә ала. Һәр кем милли үҙбилдәләнешенә һәм үҙаңына ярашлы милләтен һәм туған телен үҙе билдәләйәсәк. Ә илдең милли составын һәм халыҡтарҙың һанын билдәләүсе берҙән-бер сығанаҡ - халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре икәнен онотторға ярамай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ иҫәбен алыу кампанияһын уңышлы уҙғарыу өсөн халыҡтың үҙен дә әҙерләү фарыз. Туранан-тура ла, киң матбуғат саралары аша ла ошо хаҡта аныҡ мәғлүмәт бирергә, аңлатыу эштәрен алып барырға кәрәк. Башҡортостанда халыҡ иҫәбен алыу буйынса тәжрибә лә етерлек, граждандарыбыҙҙың әүҙемлеге һәм яуаплылыҡ тойғоһо ошо мөһим сараны юғары кимәлдә уҙғара алыуыбыҙға ышаныс уята.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Башҡортса һөйләшә белгән кеше тапмайҙармы икән баш ҡалала, әллә башҡорттарҙан көләп, юрый шундайҙарҙы ултырталармы? Шунан телдең ни ҡәҙере булһын?***



**Урал МОСТАФИН**

# ҠОЙОН ҠОЙРОҒО ОҘОН...

## *(Повестың гәзит варианты)*



Һылтау! Эшләмәйем, йүнләмәйем тигән кешегә һылтау ғына кәрәк. Бер нәмә лә эшләп булмай тигәнсә, ҡыл ҡыбырлатып ҡараныңмы, исмаһам?

- Әллә, бөтәһе лә тик йөрөйҙәр ҙә инде, мин бер үҙем нимә ҡылайым?

- Эх, Хәйҙәр ҡустым, кемдән-кемдән, ә һинән быңдай хәбәр көтмәгәйнем.

- Күршең әмәлен тапҡан да инде, уға ярҙам иткән һымаҡ, миңә лә өлөш теймәҫ микән тигәйнем...

- Һиңә генә ҡалдымы, оят түгелме? Һин уҡытыусы бит!

- Бер нисәмә һүҙһеҙ ҡалһам, кеше менән аралаша алмаҫ тиһеңме? Ана, Батыр ҡасандан бире һүҙ һатам тип маҡтана, үҙе иркен аралашып йөрөй. Беҙ русса башҡортсанан да яҡшы, урыҫтың үҙен һатып ебәрерлек һөйләшәбеҙ ҙә инде.

- Русса һөйләшә беләм тип, әсә телеңде һатырға кәрәкме ни?

- Әллә, ул телде белеүҙән ни файҙа? Тамаҡты туйҙырмай бит.

- Тамаҡты туйҙырған нәмә генә ҡәҙерле буламы?

- Ҡуй әле, Иван ағай, үҙең көн һайын телевизор, радионан телде нисек "ҡәҙерләгәндәрен" ишетеп тораһың. Мин, ярай, ябай уҡытыусы, хәҙер тел белгестәре филолог, академик, профессорҙар, ҙур вазифалы иптәштәр, дәрәжәле әһелдәр бер ҙә тартынмай, теләһә ниндәй телдәрҙе бергә бутап һөйләшә, ниңә улар оялмағас, мин оялырға тейешмен?

- Һин дә шуларға оҡшарға тырышаһыңмы ни?

- Кемгә кәрәк минең яҡшы булыуым? Ана, телевидение тапшырыуын ҡара, ышанмаһаң! Арҙаҡлы ғына кешеләрҙең йәштәргә аҡыл өйрәткәнен тыңлаһаң, оят!

- Халыҡ артисы исемен йөрөткән кеше башҡорт телен шул тиклем тупаҫ боҙоп һөйләй, ғәрлек! Башҡортса һөйләшә белгән кеше тапмайҙармы икән баш ҡалала, әллә башҡорттарҙан көләп, юрый шундайҙарҙы ултырталармы? Шунан телдең ни ҡәҙере булһын? Тылҡы-тылҡыма, йәштәр, балалар уларға ҡарай ҙа төңөләләр, шулай "круто" тип, үрнәк алалар.

- Үҙең ул хәлгә көйгәсең, мин улар кеүек булмайым, тиһәң, ней ерең кәмер ине?

- Шуларҙы ҡарап ултырып, йән көйә. "Телде һаҡлар кәрәк, телде яҡлар кәрәк", тигән булып бер туҡтауһыҙ тылҡыйҙар, икенсе яҡтан, үҙҙәре шул хәбәрҙәренә ҡаршы эшләйҙәр. Тимәк, саф күңелдән түгел, бөтәһе лә яһалма ҡыланалар!

- Бүтәндәр суҡынып китһендәр, ә һин үҙең булып ҡал!

- Әй, бөтә кеше шулай булғас, бер үҙем нимә ҡыла алам?

- Әйттең хәбәр! Һин балаларыңа, уҡытҡан балаларыңа үрнәк була алаһың!

- Юҡ, балаларҙы хәҙер шул "текәләр" үҙ өлгөһөндә тәрбиәләй, был хәлде тиҙ арала бер кем дә үҙгәртә алмаҫ, күрәһең.

- Бөтәбеҙ ҙә уларға ҡуштанлашып, япаҡлашып йөрөһәк, әлбиттә, үҙгәртеп булмаҫ. Ана бит, уҡымышлы, аңлы көйө һин дә йөҙ грамға исемеңде һатып йөрөйһөң.

- Ҙур урындарҙағылар ҙа туған телен боҙоп һөйләшеүҙе башҡаларҙан аҡылы, дәрәжәһе, белеме менән айырылыу билдәһе, ябай халыҡтан өҫтөнлөгөн белдереү ысулы итеп юрамал үҙләштереп алған бит! Уларға ҡаршы тәнҡит һүҙе әйткән кеше юҡ! Бөтәһенә бер мин ғәйеплеме?

- Эш ғәйепле-ғәйепһеҙҙе эҙләүҙә түгел, һәр кемдең намыҫы булырға тейеш!

- Ҡуй әле, Иван Иваныч, өтмә йәнемде! Былай ҙа ҡыйын. Таяҡтың иң ауыр башы менән миңә тондорорға булдыңмы, башҡалар файҙаланғас, мин кемдән кәм? Әйҙә, килешеү төҙөшәйек тә ҡуяйыҡ.

- Һин йүнһеҙгә һүҙ әрәм итеп ултырған мин алйот...

Шундай ҡурҡаҡ, һатлыҡ йәндән үс алғыһы килһә лә, йөрәге әсенеп, пыр туҙҙырып инәнән-тыума әрләп сығарып ебәрҙе. Килде ул да, тағы килде, башҡалары ла эйәртенешеп килде. Балға йыйылған себен кеүек эркелешеп килделәр. Ҡайһыныһы хәтәр хәлде ишетеп, тәүәккәлләргә килде, Ивандың бер сәйер ғәҙәтен электән белеп, көләмһөрәп йөрөгәндәре лә килде. Иван Иванович атаһынан күрә, мунсанан һуң бер көрөшкә бал эсергә ғәҙәтләнгән. Башҡа "әсе" эсемлектәрҙе - араҡы, һыраны ауыҙына алғаны ла юҡ. Әлбиттә, сәйҙе көн һайын рәхәтләнеп тәмләп эсә, миҙгеленә күрә емеш-еләк һуттарын, ҡымыҙ, айранды ла танһыҡҡа эсергә ярата, ләкин уларҙың береһе лә уның өсөн бал балын алыштыра алмай. Русса "медовуха" тип аталһа ла, уға был эсемлектең "бал" тигән исеме айырыуса оҡшай. "Медовуха" тимәй, "бал" эсәмти ул, сөнки башҡорт алама нәмәне үҙенең иң ҡәҙерле тәбиғи ризығы исеме менән атамаҫ икәнен яҡшы белә!

Заманалар үҙгәрҙе, холоҡтар ҙа үҙгәрҙе. Иван Иванович ярты ауыл ирҙәренең телдәренә сүс ҡороҡ һалды. Хәҙер килешеүҙәр ҙә уҫалыраҡ ҡына түгел, яһил шарттарҙа төҙөлә, ирҙәр килгән һайын сүс ҡороҡ шаҡарынҡырап, нығыраҡ ҡыҫып бәйләнә.

- Килегеҙ әйҙә, килегеҙ! Телегеҙ көрмәлә башлаһа, ояҡка ҡалырһығыҙ. Көрмәлеү генә түгел, ҡороша башлаһа, иҫегеҙгә килерһегеҙ әле.

Хәҙер килешеүҙәрҙең һәр береһенең айырым шарты бар: килешеү төҙөгән кеше башҡаларҙың килешеүҙе боҙоу-боҙмауын күҙәтеп йөрөп, хәбәр итергә тейеш. Шулайтып, элекке әшнәләрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡотортоп бөттө. Һәр кем икенсене тыңлай, күҙәтә махсус шымсы хеҙмәтен үтәй! Ғәрлек! Ошо мәлдә Иван Иванович үҙен, тәнен ары-бире әтмәләнгән тире киҫәге менән япҡан, күҙ алмалары ҡыҙарған, танау япраҡтары тирткән, ауыҙы салшайған, сәстәре туҙған, ҡулындағы уҫтаптай суҡмары менән яңы ғына ҡаршыһына өңөнән сығып, уға тештәрен ыржайтып ултырған бүренең ҡаҡ башына һелтәнергә торған боронғо һунарсылай хис итте. Хас шулай, бер ере менән дә кәм түгел. Тегеләр ҡырағай холоҡтарын күрһәтәләр икән, уға ниңә әҙәп һаҡлап ултырырға? Яуызды үҙенән дә яуызыраҡ булып ҡына алама холҡонан арындырып була. Әпәүләгән һайын ул оторо ҡотора! Битһеҙлектең сиге ҡайҙа? Бармы икән уның сиге, уй, Аллам!

Ярай, ауылдаштары араһында яман эше менән яманаты таралһа ла, әгәр бер-ике кешене төпһөҙ упҡындан йолоп алып ҡалһа, үкенмәҫ. Аңға һыймаҫлыҡ аламалыҡҡа, ҡот осҡос яһиллыҡҡа барһа ла, үҙенә сит-ят булмаған әҙәм балаларының ғүмерен һаҡлап ҡалыр өсөн башына ҡарғыш, йәненә гонаһ алырға ла, тамуҡҡа төшөргә лә риза ине ул.

* * *

Иван, донъяны арҡырыға-буйға иркен гиҙмәһә лә, юғары вазифалы урындар биләмәһә лә, ауылдаштары алдында уҡымышлы, теремек аңлы, ҡыҙыҡһыныусан аҡыллы, һәр нәмәгә үҙ фекерле кеше һанала. Ул һуғыш мәлендә тыуған бала. Атай елкәһендә ултырып, уның көслө ҡулдарынан күккә сойорғотолоп яратылып, иркәләп йәшәү тәтемәне ул быуындың күп балаларына. Ҡытлыҡ йылдарының ауырлыҡтарын сибек кенә елкәләренә иҫ белгәндән алырға тура килде. Шулай булһа ла, бер кемдең хөкүмәткә, ватанына, яҙмышына асыу, нәфрәт түгел, хатта бәләкәс кенә дәғүәһе лә булманы, сөнки донъяның аҫтын-өҫкә килтергән һуғыш осоронда өлкәне-кесеһе сабырлыҡ, түҙемлеккә сараһыҙҙан, бер-береһенә ҡарап өйрәнеп, күнекте. Атаһы һуғыштың әсе һурпаһын туйғансы һемереп, бер аяғын ят ерҙә ерләп, зәғифләнеп ҡайтҡан кеше, анауындай ҡырылыштан тере ҡалғас, сәмләнеп, әҙәмсә йәшәргә тырышты. Мәктәпте тамамлап, трактористар курсында уҡып йөрөгән еренән армияға алдылар, хеҙмәтен тамамлап ҡайтып, үҙ донъяһын ҡороп йәшәй башлайым, тигәндә һуғыш башланды. Ул һуғышҡа киткәс, малайҙары тыуҙы. Нәҫелдәрендәге боронғо йола буйынса баш ир балаға Иван тип исем ҡуштылар. Атаһы ҡайтыуға, үҙе кеүек кәүҙәгә тос малай ағас мылтыҡ тотоп, атыш уйнап йөрөй ине инде. Хәҙер һыңар аяҡ менән трактор йөрөтөп булмай. Трактор йөрөтөргә көслө ике аяҡ кәрәк. Район үҙәгендә 6 айлыҡ курс тамамлап, хисапсы-бухгалтер һөнәре алып ҡайтты ла ғүмере буйы лесхоз конторында иҫәп-хисап эшен атҡарҙы. Өлкән Иван улын гел үҙе менән эшкә алып йөрөнө. Ниндәй уй-ниәттән улай эшләгәндер, кем белһен. Улы күберәк ирҙәр араһында ирҙәр хәбәрен, ирҙәр мәрәкәһен тыңлап үҫкәнгәлер, зирәк зиһенле, ҡыйыу фекерле, үҙһүҙле, намыҫлы егет булып үҫте. Зәғиф тип ҡарауҙарына, йәлләп маташыуҙарына атаһының ни тиклем йәне көйгәнен, ғәрләнгәнен күрҙе. Әпәүләп өндәшкәндәргә атаһының тупаҫ, ҡаты яуап биргәнен ишетте. Үҙең ниндәй хәлдә булғанда ла башҡалар менән тигеҙ икәнеңде тойорға, тойҙорорға кәрәк икәнен аңланы. Уның өсөн башҡаларҙан кәм булыу түгел, уларҙан бер башҡа юғары булыу кәрәк! Үҙеңде үҙең кәмһетәһең икән, башҡаларға ни ҡала? Атаһының ҡылыҡ, холҡондағы кешеләр менән аралашыу нескәлектәрен, кешеһенә ҡарап төрлө мөнәсәбәттә булыуын яҡындан күреп, ишетеп үҙләштерҙе ул. Шул өлкәндәр менән иртә тигеҙ аралашыу, уларҙың миҫалында тәрбиәләнеү күҙәтеүсән, һиҙгер малайға мул тормош һабаҡтары бирҙе. Кешене кешенән айыра белеү, кем менән үҙеңде нисек тотоу кеүек асыҡ дәрестәрҙең йоғонтоһо ҡанына һеңде. Өлкән-өлкән ағайҙар, апайҙар атаһы менән кәңәшләшәләр, уның фекерен һанға һуғалар, ярҙам һорайҙар. Ауылда, эшендә атаһын ихтирам итеүҙәренә ғорурланып үҫте ул. Атаһының да малайын бергә алып йөрөү маҡсаты шул булғандыр, күрәһең.

Кеше менән дә булышты Ивандың атаһы. Һуғыштан йәп-йәш көйө имгәнеп ҡайтып, үҙен башҡаларҙан кәм тойопмо, әллә тән көсһөҙлөгөн, күңел йомшаҡлығын күрһәтһә, ҡыйырһытырҙар типме, яһалма рәүештә ҡырыҫ холоҡло, уҫал, тиҫкәре булып күренергә тырышты. Был аяуһыҙ тормошта ҡатыраҡ, алабарманыраҡ булһаң, йәки шулай булып күренһәң, күрәләтә һәр береһе өҫтөңә менеп бармаҫ, кәмһетергә уйлаһа ла, яман язаһын аласағын белеп тыйылыр, тип уйлағандыр. Ғаиләһендә, туғандары араһында уны бик алсаҡ, йомшаҡ күңелле, ғәҙел кеше күреп хөрмәт иттеләр. Үҙенең ейәндәре, күрше-тирәһенең балалары йыйылып, урамда һәпәләк уйнаһа, шуларға ҡушылып, ыңғайҙарына сарылдашып уйнап китер ине. Ҡаты күңелле кеше улайта аламы һуң инде? Юҡ, әлбиттә! Тағы бер аптыраткан күренеш бөгөн дә күҙе алдында тора улының. Телевизорҙар ауылда ишәйгәс, күршеләр бер-береһенә йөрөп кино ҡараны. Һуғыш тураһында кино күрһәтә башлаһалар, атаһы йәне көйөп сыға ла китә торғайны.

- Һуғышта улай булманы, алдап күрһәтәләр. Ҡарамағыҙ! Бер ҡыҙығы ла юҡ уның. Беҙ күреп ҡайтҡандар етмәйме һеҙгә? Һуғышта булмағандар, матурлап күрһәтеп, тағы һуғыш көҫәйҙәр беҙҙең балаларға!

Атаһы, ярай, һуғыш ветераны, зәғифләнеп, ҡәһәрләнеп, һуғыш касафатын үҙ елкәһендә татыған кеше, яҙмышына, тормошҡа, башҡаларға үпкәһе, асыуы, дәғүәһе булыуы ғәжәп түгел. Эргәһендәгеләрҙең, ауылдаштарының бер ғәйебе юҡ икәнен белә тороп, ниңәлер үҙен шулай тотто, уныһын үҙе генә белгәндер. Ә улы Иван ниңә һуң бөгөн шул холҡто ҡыуырға булды? Атаһының холҡо улына йоғамы? Йоғалыр, күрәһең. Ул бит күберәк атаһының башҡа кешеләр менән мөнәсәбәте тәьҫирендә, уның өлгөһөндә үҫте, атаһынан да абруйлы кеше булманы уға донъяла! Ҡартатаһының кешеләргә ҡырыҫ холҡон күреп, тойоп үҫкән Ивандың улы, хәҙер атаһының Батыр менән

✓ ***Батыр күҙгә күренеп терелде. Йөҙө асыҡ, хәрәкәттәре етеҙ, һүҙҙәре аныҡ. Унын электән шулай икәнен онотоп та баралар ине ауылда. Йөҙөнән, атлауынан икенсе кеше тип уйларһың.***

булышҡанын белһә, нимә тиер? Оят! Белеп кенә ҡалмаһын. Алла һаҡлаһын! Юҡ, юҡ, ул бит былай ғына, шаяртып ҡына, күршеһен алама ғәҙәтенән яҙҙырам тип, изге ниәт менән тәҙөштө был килешеүҙе. Оҙаҡ йөрөй алмаҫ, аңына килер. Кеше белеп ҡалһа, әҙәм мәсхәрәһе! Иван үҙен шулайтып йыуатып ҡараны, аҡлап маташты, ләкин күңелен бер ҡорт әсеттереп-әсеттереп кимерҙе. Яҡшылыҡ аламалыҡ менән эшләнмәй, кешене аҡылына ултыртыр башҡа әҙәмсә саралар барҙыр бит? Ниңә уны фәҡәт кәмһетеп, ғәрләндереп, кешелек сифаттарынан көлөп, тоғро юлға баҫтырырға? Ҡайҙа, ниндәй һуң ул кешелек һыҙаттарын юғалтып барған кешене мәрхәмәтле тәрбиәләү ысулдары? Бармы улар? Яманлыҡ, яуызлыҡты яҡшылыҡ, яғымлылыҡ менән генә еңеп булмай, ти торғайны атаһы мәрхүм, бәлки, был яҙылмаған тәғлимәттер.

Иван Иванович "Уйындан уймаҡ сыға", тигәнгә олоғайған көнөндә тағы бер тапҡыр, хәҙер инде ғүмеренең ахырына хәтлем, онотмаҫлыҡ булып иненды. Араҡынан башын, аңын юғалтып, ғаиләһен ыҙалатып, алама юлға баҫҡан үҙенең улындай күргән кешеһен аҡылға ултыртыу өсөн зарарһыҙ, ваҡытлыса ғына тәрбиә ысулы тип башланған эш, ғибрәтле хәлгә әүерелер, тип кем уйлаһын? Ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығарып ҡуйманымы? Ниндәй аяныслы хәлгә килеп еттеләр. Сама кәрәк шул, һәр нәмәлә сама белеү кәрәк! Ауылдаштарының күңел төбөндә ғәрлек, оят, намыҫ, ғорурлыҡ тойғолары бөтөнләй һүнмәгән икән, баҙлап ҡына ятҡан осҡондары терелде. Бер-береһенән тәүге осорҙа оялышып, аралашыуҙан ҡастылар, кеше күренһә, тиҙерәк урамдарына йәшенеү яғын ҡаранылар, ҡайһылары берәм-һәрәм ауылдан ҡаса башланы, нигеҙҙәрен ташлап күсенеп китеүселәр ҙә бар. Бөтәһененең дә барып һыйыныр туғандары бармы икән, әллә ят кешенең тупһаһын тапайҙармы? Кем генә белһен инде. Уңһа ла, уңмаһа ла, шул бер тәжрибәһе булды: ниндәй генә изге тип башлаған эштә лә сама белеү кәрәк икән. Йүнле эшкә сәм, дәрт әйҙәгән кеүек, йүнһеҙенә лә шул уҡ сәм етәкләй икән әҙәмде, сама белмәгән әҙәмде! Хәҙер, ана, эсеренә, ашарына бар, һарай-ҡураһы тулы мал, донъяһы теүәл, һүҙгә-телгә бай, ә һөйләшер, күңелен бүлешер кешеһе юҡ. Күңеләндә киң асып, ихлас ауыҙ тултырып һөйләшер кешең булмаһас, ул һүҙҙәрҙең ни хәжәте бар?

Кешеләрҙең бер-береһенән йәшенеп йәшәүҙәрен, күрешеп, һөйләшеүҙән ҡасыуҙарын һиҙгәндәй, мал, ҡошҡорттар ҙа боҫто. Йорт-ҡура һаҡларға кәрәктәре булмаһас, эттәр ҙә өрмәй ауылда. Бөтә кәсептәре - бағананан бағанаға йүгереп йөрөп, тамға һалыу, аныһы лы шулай кәрәклектән түгел, элекке замандан ҡалған ғәҙәттәре буйынса ғына атҡарыла. Ары-бире ас һыйырҙар үҙәкте өҙөрҙәй мөңрәүҙәре менән тынıслыҡты боҙа. Иң көслө тауышлы әтәстәр ҙә телдән яҙҙы. Элек үҙ бәҫтәрен белгән бесәйҙәр урам аша һәлмәк кенә атлап сыҡһа, хәҙер алан-йолан ҡаранып, буш араны бер ынтылыуҙа үтергә тырыша, йәнәһе, тауыш-тынһыҙ буш урамда уларға аҙым һайын ҡурҡыныс янай. Хатта март айындағы тәбиғи бурыстарын да шаушыуһыҙ, боралмай ғына, кешеләрҙән йәшенеп үтәйҙәр. Ауыл урамының шомлоғо төнөн түгел, көндөҙ ҙә һағайта. Хәҙер урман төпкөлөндә яңғыҙ, мылтыҡһыҙ йөрөүҙең бер ҡурҡынысы юҡ, әллә йәнлек, йыртҡыстар ҙа кешеләрҙән ҡурҡып ҡасып бөттө инде, көнө буйы әллә күпме ер ҡыҙырып, бер ҡырағай йән осратмаҫһың. Ә ауыл урамының ишек, тәҙрәләре арҡыс-торҡос ҡатылған, ҡарасҡы кеүек һерәйешеп ултырған йәнһеҙ өйҙәре эргәһенән үтеүе ҡурҡыныс! Уларҙан ниндәйҙер хәүеф янаған кеүек: эргәһенән үтеп барғанда ынтылып тотор ҙа, ҡараңғы, ҡотһоҙ эсенә йотор, йәиһә, упайып торған буш күҙҙәренән әллә ниндәй яуыз албаҫтылар һикерешеп килеп сығыр кеүек. Ҡурҡыныс!

Йә, моратыңа ирештеңме инде, алйот! Ҡаратырышлығың, еңмешлегеңдән ҡәнәғәтһеңме? Кемгә ярҙам иттең? Изгелегеңдән берәү файҙа күрҙеме, тип әрләй үҙен. Бөтәһен дә шул эште башлаған мәленә кире ҡайтарыр ине лә, һуң! Ваҡытында туҡтарға кәрәк ине. Яман даны таралды, фәтүәһе юҡ. Уйынға самаһыҙ мауығып китеп, күпме кешене рәнйетте. Ҡарғыштары башына төшмәҫ, тимә. Бөтә ғәйепте үҙ өҫтөнә алыуҙан күңеле бушаманы, йәне тынысланманы.

* * *

Иван Иванович ҡайғырып, ҡаңғырып, үҙ көсө менән генә хәлде төҙәтә алмаҫын аңлағас, Магниттағы улына эскелектән дауалау юлдарын белешеп ҡайтырға ҡушты. Батыр күршеһе электән араҡыға мауыҡҡан йә тыумыштан аҙғынлыҡта, тотанаҡһыҙлыҡта тәрбиәләнгән әҙәм түгел. Ул донъяһын баҫып алған ауырлыҡтарҙан, йәнен төңөлдөргән хәүефле уйҙарҙан башҡаса ҡотолор сараһын тапмай, ирекһеҙҙән, аңын томалар өсөн эскегә һабышҡан кеше. Тыйып, оялтып, ғәрләндереп кенә ихтыярын тергеҙеп булмаясаҡ. Уның күңелен берәй шөғөл, аңын берәй ғәм менән ҡыҙыҡһындырырға, батҡағынан сығарыр юлын күрһәтергә кәрәк. Әгәр мейеһенә бер бөртөк өмөт орлоғо һалып булһа, ул мотлаҡ шытасаҡ. Әҙ генә ярҙам кәрәк!

Дуҫын бәләнән ҡотҡарыр өсөн нисек ярҙам итергә белмәй көйөп йөрөгән улы атаһының йомошон ихлас үтәне. Ялында иптәш егетенең машинаһында ҡайтып төштөләр. Хәлде атаһына аңлатты: белешкән, һөйләшкән, Батырҙы иртәнән һуң үҙе менән алып китәсәк. Ярай, үҙенә аңғартмай торайыҡ, йә ҡаршылаша башлар, йә бармаҫҡа берәй һылтауын алдан әҙерләп ҡуйыр, тип килештеләр. Ул көндө мунса төшөп, иртәгеһенә урманды ҡыҙырып йөрөп килергә үҙ хәленән оялып, иң яҡын дуҫынан ситләшә башлаған Батырҙы ла көсләп тигәндәй эйәртеп алып киттеләр. Таң менән сығып киткән кешеләр ҡараңғы төшкәс саҡ ҡайтып инде. Әҙер мунсала сайынып сыҡҡан егеттәрҙең ҡыҙыу әңгәмәһенә ҡолаҡ һалһа, ниндәйҙер яңы эш тураһында йәнләнеп-йәнләнеп һөйләшәләр, план ҡоралар. Батырҙы алыштырып алып ҡайтҡандармы ни! Күҙҙәре тоҡанып, ҡараштары терелеп, йөҙө асылып киткән кеүек.

- Беҙ элекке лесхоз биләмәләрен йөрөп сыҡтыҡ. Батыр ҡунаҡ егеткә бөтә хужалығын күрһәтте: буш һарайҙарын, келәттәрен, умарталыҡтарын, ялан, болондарын ҡараныҡ.

- Ул буш һарай, ташландыҡ умарталыҡтарҙың уға ни хәжәте? Ҡайҙа, кем булып эшләй һуң иптәшең?

- Хәжәте бар икән шул. Ул комбинат директорының ярҙамсы хужалыҡ буйынса урынбаҫары. Миңә өндәшмәһә лә, хужалыҡтарын киңәйтеү өсөн уңайлы урын эҙләп, белешеп йөрөгән. Был яҡҡа килеүенең дә сәбәбе шул.

- Шунан? Оҡшаттымы беҙҙең яҡтарҙы? Бынау сама ергә килмәһәләр ярар ине, яҡынтирәләрендә ер бөткәнме уларға?

- Ғәләмәт оҡшатты. "Һа-ай, иркенлек, һа-а-ай, хөрриәт!", тип тик йөрөнө. Эште башлап ебәрергә бөтә уңайлыҡтар бар: бина, ҡоролмалар ғына түгел, бында үҙ шөғөлөн урынына еткереп атҡарырлыҡ белгестәр ҙә етерлек. Ана, ауыл тулы эшһеҙҙәр.

- Ҡуй, ышандырып юҡты һөйләмә лә! Ниндәй ҡыуаныстан беҙгә ул бәхет?

- Ысын, ысын, атай, ышанмаһаң, үҙе менән һөйләш. Ул ғына ла түгел, Батыр иртәгәнән шул хужалыҡтың етәксеһе булып эш башлай. Һарай-ҡураларҙы, умарталыҡты мал, ҡорт килгәнсе йүнәтергә кәрәк.

- Һуң, иртәгә уны Магнитҡа алып китәһең дә инде.

- Юҡ, һәйбәтләп етди һөйләштеләр. Батыр, эш булһа, эскене былай ҙа ташлай алам, тип ант итте. Мин уға ышанам.

- Ай-һа-ай, улым, ул нәмә менән байтаҡ булышты, тиҙ генә ҡороғонан ысҡындырырмы икән?

- Хужаһы: "Әгәр саҡ ҡына эскәненде һиҙһәм, йә берәйһенән ишетһәң, бер көн эшләмәйәсәкһең", - тип ҡаты иҫкәртте.

- Ҡана һуң! Эшләп кенә китһәләр ярар ине.

Иван Иванович, барыбер, ҡунаҡтың үҙе менән һөйләшмәйенсә тынıслана алманы. Иртәнсәк сәй эскәндә ситтән уратыңҡырап белешә башлағайны, егет үҙенең уйлағанын йәшермәй-боҫормай асып һалды.

- Икеләнмәгеҙ, беҙ бай ойошма, ҡуртымға алған ер, мөлкәт өсөн һәйбәт түләйбеҙ. Егерме-утыҙ кешегә эш урыны буласаҡ. Бөгөн үк үҙәк конторҙарға һуғылып, договор тураһында килешеп ҡайтам.

- Улар, бесән өҫтөндә ултырған эт һымаҡ, үҙҙәре лә ашамай, башҡаны ла яҡын ебәрмәһәләр?

- Ю-у-уҡ, хәҙерге мәлдә буш килгән аҡсанан кем баш тартһын, ике ҡуллап риза буласаҡтар, уныһына шикләнмәйем дә. Хужалар күберәк үҙ яйҙарын ҡарай. Ҡаршылашһалар, конторы-нийе менән һатып ала ла ҡуябыҙ!

"Ой-бо-о-й! Йәш кенә булһа ла, ҡыйыу егет икән. Ҡалай эре сирттерә", тип уйлап ҡуйҙы эстән генә Иван Иванович. Һөйләгәне буйынса аттар, һыйырҙар менән буш һарайҙарҙы, ҡорттар алып килеп умарталарҙы тултырһа, йәшниктәр етештерергә ҡайын трансаһы бысып эшкәртә башлаһалар, байтаҡ кешегә эш була шул. Батырҙан ғариза яҙҙырып, эште башларға күрһәтмәләрен биреп, үҙенең бер кеҫә телефонын ҡалдырып, ҡайтып китте.

Иван Иванович, үҙен әйттерергә килгәндәрен көтөп йөрөгән ҡыҙ һымаҡ, хәлдәрҙең үҙгәрешен тулҡынланып көттө. Иртәнсәктән үҙенә урын тапмай, тәнтерәкләп тик йөрөнө: берәй эш менән булышайым, тиһә, күңеле ятманы, ҡулы ҡалтыраны, телевизор ҡарайым, тиһә, ултырып сыҙаманы. Төшкә ҡарай Батыр күршеһенә инеп, хәлде белешмәй булдыра алманы. Батырҙың теремеклеге лә, һүҙҙәре лә тынысландырҙы: эйе, шылтыратҡан, бөтәһе лә ул әйткәнсә килеп сыҡҡан, кешеләр яллап, эште бөгөн үк башларға ҡушҡан. Батыр күҙгә күренеп терелде. Йөҙө асыҡ, хәрәкәттәре етеҙ, һүҙҙәре аныҡ. Уның электән шулай икәнен онотоп та баралар ине ауылда. Йөҙөнән, атлауынан икенсе кеше тип уйларһың. Төңөлгән йән терелеп, сәмләнһә, элеккенән дә әрһеҙерәк, намыҫлыраҡ була икән.

Яңы хужа, йәш кенә булһа ла, ысынлап та ҡыйыу, тәүәккәл егет булып сыҡты: шылтыратып, хәл белеште, үҙе килеп етте, береһенә лә тынғылыҡ бирмәне. Элегерәк, йүнле эш булмағас, илке-һалҡы эшләргә өйрәнеңкерәп киткән эшселәрҙе, үҙ яйына йүгертеп, күҙҙәрен аҡшайтты, әйтәгүр. Һарай, келәттәрҙе, рам, станоктарҙы ҡарап сығып, ҡайһыларын һүтергә, ҡайһыларын йүнәтергә бойорҙо, әҙерлек ваҡытын тәғәйенләне. Һарайҙарға мал инде, умарталар килде. Техника, эш ҡоралдары, төрлө яңы ҡорамалдар килтереп урынлаштырҙылар. Таҡта ярыу цехы эш башланы. Хужалыҡ кәрәк-яраҡтарына мохтажлыҡ юҡ. Быға тиклемге бушлыҡтың афәтен үҙ елкәләрендә татыған халыҡ хәҙер эштең ҡәҙерен белә: өр-яңынан ең һыҙғанып эшкә тотондо. Үҙ шөғөлө булғанда, үҙенең кәрәклеген белгәндә, кеше үҙен ихтирам итә башлай шул. Ир кеше бигерәк тә.

Бына бит, уйламаған ерҙән килеп сыҡҡан бер әрһеҙ егет әллә күпме кешенең донъяһын ыңғайлатты ла ебәрҙе. Ауылда тормош йәнләнде. Эттәр, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, көр күңелле хужаларына ярайым, тип, тиктомалға ларһылдашалар. Һыйырҙарҙың мөңрәүе үҙгәрҙе, ашарға һорап, инәлеп түгел, һөтөмдө тиҙерәк һауып алығыҙ, тигәндәй, көйләп-йырлап мөңрәгән кеүектәр, бисаралар. Әтәстәр инде бөтәһенән дә уҙҙыра: үҙҙәре күкәй һалғандармы ни? Һәр бер ҡысҡырыуҙарында: "Беҙ шәп, беҙ шәп!" тигән ауаздар асыҡ шәйләнә.

Кешеләр ҙә йәнләнде: әллә ҡайҙан ҡысҡырышып һаулашалар, шарҡылдашып көлөшәләр, яңынан ауыҙ тултырып тартынмай һөйләшергә өйрәнделәр. Алла бирһә, шулайтып яйлап, ауылдаштары мәғәнәһеҙ сериалдарҙағы яһалма тормош геройҙары өсөн борсолоп түгел, үҙҙәре кисергән ысын тормош ҡыуаныстарын татып йәшәргә лә өйрәнер әле. Ә ысын тормош ҡойон, бурандарһыҙ булмай. Һуңғы ваҡытта ҡупҡан ҡойондоң да саңтуҙаны баҫылыр, сүп-сарҙарын йыйып, тарих келәттәренә быраҡтырырҙар, хәмер ҡағылыу зәхмәтенән зыян күргәндәр бәлә-ҡазаларынан арынып, өр-яңынан йәшәй башлар. Ана бит, ниндәйҙер аҡыл инләмәҫ мөғжизәле хәлдәрҙән донъя ҡапыл ыңғай яҡҡа ла үҙгәреүсән. Уйламаған-көтмәгәндә әллә ҡайҙан килгән Алла бәндәһе ауыл ирҙәренә: "Әйҙә, балыҡты үҙегеҙ тотоп ашағыҙ", - тип, ҡармаҡ тотторап китте.

**(Аҙағы).**

***ШУЛАЙ ИТЕП...***
***Баймаҡ ҡалаһында йәшәп ятҡан авторыбыҙ Урал Мостафин үҙенең ошо тәүге проза әҫәрендә бөгөн халҡыбыҙ өсөн үтә актуаль проблемаларҙы күтәрә, уларҙың ауыр эҙемтәләрен беҙҙең йөрәк аша ла үткәрә, хатта уларҙың хәл ителеү юлдарын да килтереп сығара. Дөрөҫ, был кешелектең Ерҙәге йәшәйеше менән һыналған алым - хеҙмәт кенә ҡотҡара ала кешене бар бәләнән, зәхмәт-афәттән. Ә бөгөн күптәр хеҙмәт төҫөн күрә алмай. Әлеге әҫәрҙәге кеүек, ҡайтһын ине аҡыллы егеттәребеҙ үҙ тыуған төйәктәренә, эш бирһен ине ауылдаштарына, яҡташтарына. Битараф булмағандар ошо хаҡта оран һалһын, аҡсалы егеттәрҙең ни өсөн ауылға ҡайтырға тейешлеген нигеҙләһен ине. Ау-у! Ошо мәсьәләгә битараф булмағандарҙы повеста күтәрелгән проблемалар хаҡында бәхәскә саҡырабыҙ!***

ИНТЕРНЕТТАН



# БЕҘҘӘ ЯҢЫ ФӘН, ҠАҒИҘӘЛӘР...

## Америкала - талондар

■ Тиҙҙән сит ил граждандары физик шәхескә ялланып эшләү өсөн патент алырға бурыслы буласаҡ - Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте "РФ-ла сит ил граждандарының хоҡуҡтары тураһындағы" законға, РФ Һалым һәм Бюджет кодекстарына төҙәтеү индерҙе. Был закон проекты тышҡы хеҙмәт миграцияһы ағымын көйләүгә, Рәсәйҙең эске хеҙмәт баҙарын һаҡлауға һәм Рәсәйгә визаһыҙ эшкә килеүсе сит ил граждандары өсөн шарттар тыуҙырыуға йүнәлтелгән. Проектты тәҡдим итеүселәр фекеренсә, закон үҙ көсөнә инеү менән Рәсәйгә квалификациялы белгестәрҙе лә йәлеп итеп буласаҡ.

■ 2010 йылда Ломоносов исемендәге МДУ-ға уҡырға инер өсөн абитуриенттар БДИ һөҙөмтәләренән тыш, профилле фән буйынса өҫтәмә һынауҙар ҙа тапшырырға тейеш буласаҡ, тип белдерҙе университеттың ректоры Виктор Садовничий. Мәҫәлән, механика-математика факультетына уҡырға инер өсөн абитуриент физика, математика, рус теле буйынса БДИ һәм математика буйынса өҫтәмә имтихан тапшырасаҡ. "Был имтихан БДИ-ны тикшереүҙә, уны ҡабатлау ҙа түгел. Был имтихан уҡырға инеүсенең һәләттәрен асыуға йүнәлтелгән", - тип белдерҙе ректор. Быйыл бындай өҫтәмә имтихандар университеттың бар факультеттарында ла ҡулланыласаҡ. Вузға уҡырға инеүҙең яңы ҡағиҙәләренә ярашлы, 2010 йылда абитуриенттар ғаризаны 5 уҡыу йортона һәм уларҙың һәр береһендә 3 һөнәргә бирә ала. Уҡырға ингәндә Бөтә Рәсәй, Халыҡ-ара һәм мәктәп уҡыусылары олимпиадалары еңеүселәре льготаға эйә буласаҡ. Айырып әйткәндә, бындай олимпиадалар еңеүселәре вузға имтихандарһыҙ алына йәки еңеү факультеттың профилле фәне буйынса БДИ-ның 100 балына тиңләшә.

■ 2010 йылдың апреленән мәктәптә дин нигеҙҙәрен өйрәнеү буйынса Рәсәйҙең 19 төбәгендә тәжрибә башлана. Мәскәү Рухани академияһы профессоры, протодиакон Кураев әйтеүенсә, был курс төп дәрестәр селтәренә индерелә. Мәктәп уҡыусылары һәм уларҙың ата-әсәләре Рәсәйҙәге дүрт традицион диндең (ислам, православие, буддизм һәм иудаизм) тарихын һәм нигеҙҙәрен йәки донъя диндәре нигеҙҙәрен, йә булмаһа донъяуи этика нигеҙҙәрен һайлай аласаҡ. Ғинуарҙа уҡытыусыларҙың квалификацияһын күтәреү башлана, ә февраль башына яңы фән буйынса эш программалары һәм дәреслектәр әҙер буласаҡ.

■ Америка Ҡушма Штаттарына аслыҡ хәүефе янай. Аҙыҡ-түлек һатып алырға ла аҡсалары булмаған кешеләр иҫәбе бында көндән-көн арта, шуға ла был проблеманы ваҡытлыса хәл итеү өсөн аҙыҡ талондары таратыла башлаған. Эшһеҙҙәр кәмеү менән хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәк, тип ышана американлылар, әммә иктисади көрсөк арҡаһында эшһеҙ ҡалғандар һаны әлегә кәмергә уйламай. Ауыл хужалығы министрлығы статистикаһы буйынса, әлеге мәлдә аҙыҡ-түлек талондарына 35 миллиондан күберәк, йәғни халыҡтың 10 проценты мохтажлыҡ кисерә. Был талондар ярҙамында осоҡло аҙыҡ һатылған магазинда түләргә йәки аҙыҡ-түлек һалынған махсус йәшниктәр алырға була. Бындай йәшниктәр айына бер тапҡыр бирелә. Обама был хәлде "хәүеф тыуҙырыусы" тип атай. Талонға ғариза биреүселәр артыуы, ҡиммәт булмаған аҙыҡ дефициты илдә сәләмәт булмаған тенденция тыуҙыра. Президент фекеренсә, хеҙмәт баҙарын йәнләндереү мотлаҡ, тик эшһеҙлек кимәле элеккесә - 10 процент көйө ҡала бирә.

ПАРАДОКС

# ГОРИЛЛА ҺЫНДЫРҒАН МЫЛТЫҠ -

## был кешелеккә иҫкәртеү түгелме?

**Ҡорбан ғәйете байрамдары, ғөмүмән, ҡорбан салыуға бәйле Ислам дине йолалары менән йәшәгән мосолман халыҡтары өсөн вегетарианлыҡ ят күренеш һымаҡ тойола. Шулай ҙа шул юлды ҡыуған Айҙар Күсәевтың төрлө сығанаҡтарға таянып килтергән дәлилдәрен уҡығанда, парадокс булырлыҡ фекерҙәр, хәл-күренештәр бик күп булыуына инанаһың. Ысынлап та, бер ниндәй ҙә ғәйебе булмаған хайуандарҙың ҡанын ҡойоп, уларҙың ите менән туҡланып, кешелек яңылыш юлдан китмәнеме икән, тигән уйҙар ҙа тыуа авторҙың вегетарианлыҡты яҡлап килтергән дәлилдәрен уҡығанда.**

**Төп вегетариан диетаһын үҫемлектәр донъяһынан алынған аҙыҡ-түлек тәшкил итә. Уға иген аҙыҡтары, йәшелсә, емеш-еләк, сәтләүектәр инә. Йомортҡа, һөт һәм һөт аҙыҡтарын: сыр, май, ҡаймаҡ һәм ҡоротто ҡулланһаң да, ҡулланмаһаң да була. Ә хайуан иттәрен, шул иҫәптән балыҡ һәм ҡош иттәрен, майҙы, башҡа иттән эшләнгән аҙыҡ төрҙәрен ҡулланыу, ай-һай, кәрәкме икән? Ошоно раҫлап, кире ҡаҡҡыһыҙ бик күп дәлилдәр килтереп булыр ине, ләкин беҙ бында иң мөһимдәрен генә һанап үтәбеҙ.**

⌘ **Беренсе дәлил.** Киң танылыу тапҡан ғалимдарҙың вегетарианлыҡ тураһындағы уй-фекерҙәрен килтереп үтеү мотлаҡ. Гассенди, Линеус, Даубентон, Кювье, Лоренс, Белл, Овен һәм башҡа күп кенә ғалимдар иҫбатлауынса, кешелек затының эске ағзалары һәм тышҡы тән төҙөлөшө уның өсөн үҫемлек аҙыҡтары иң яраҡлыһы икәнен асыҡтан-асыҡ күрһәтә. Кеше анатомияһы юғары кимәлдәге маймыл анатомияһына яҡын. Маймылдар тик сәтләүек, емеш-еләк һәм бөртөклөләр менән генә туҡлана. Әгәр ҙә уларҙы ныҡышмалы рәүештә көсләп ит аҙығына өйрәтһәң, улар һимерә башлай, һаулыҡтары ҡаҡшай һәм баҫалҡыға әйләнә. Кешенең теше ит ашаусы хайуандарҙыҡына ла, үлән утлаусы йәнлектәрҙекенә лә түгел, ә маймылдарҙыҡына нығыраҡ оҡшаған. Ошо үҙенсәлектәр һәм башҡа анатомик билдәләр кешелек өсөн йән ҡыймайынса әҙерләнгән тәбиғи аҙыҡтар иң яраҡлыһы икәнен дәлилләй. Вегетарианлыҡты ҡабул итмәүсе ҡайһы берәүҙәр кешелә ит ашаусы хайуандарҙыҡы һымаҡ аҙау тештәр барлығына һылтана. Тик шуны оноторға ярамай, ул тештәр менән йыртҡыс хайуандар шикелле умырып ит ашап булмай. Маймылдарҙың аҙау тештәре кешенекенән дә нығыраҡ үҫешкән, тик улар уны һөжүмдән һаҡланыр һәм ҡаты үҫемлектәрҙе тишер өсөн файҙалана. Вегетариан ашамлыҡтар, тәбиғи аҙыҡ булараҡ, кеше тәнен һығыту һәм үҫтереү өсөн барлыҡ туҡымаларҙы ла бирә һәм ул аҙыҡтар менән туҡланғанда ашҡаҙан да, аш һеңдереүсе ағзалар ҙа бер ниндәй ҙә көсөргәнеү кисермәй. Тағы ла шуны өҫтәргә мөмкин, кешенең һөйәк нығлығы, беләк көсө, ғөмүмән, күркәм һәм ныҡлы тән төҙөлөшөнә, сәләмәтлегенә вегетариан диетаһы, һис һүҙһеҙ, тик ыңғай тәьҫир итә.

⌘ **Икенсе дәлил.** Ит аҙығында үҫемлек донъяһында булмаған артыҡ бер нәмә лә юҡ. Киреһенсә, үлтерелгән йән эйәһенең итендә тәбиғи шәкәр һәм крахмал булмауы, саманан тыш ит өлөштәренең күп булыуы уны ашарға яраҡһыҙ аҙыҡ тип иҫәпләргә нигеҙ бирә. Шул уҡ ваҡытта үҫемлек аҙыҡтары араһында бөтә тәбиғәт шарттарына һәм һәр кемдең тормош кимәленә ярашлы аҙыҡ-түлекте һайлап алып була. Сөнки ҡайһы бер бөртөклөләр, үләндәр һәм тамыраҙыҡтар, йәшелсә һәм сәтләүектәрҙә иткә ҡарағанда ла күберәк ит өлөшсәләре бар, ә ҡайһы берәүҙәрендә крахмал, май һәм шәкәр, йәғни эске йылылыҡ һәм физик көс сығанаҡтары саманан артыҡ тупланған. Йәшелсәләрҙең туҡыма һәм аҡһым төҙөүсе өлөшсәләре хайуан итенеке менән шул хәтлем оҡшаш, хатта уларҙың төҙөлөшөн айырыуы ла ҡыйын һәм химик юл менән дә улар араһындағы айырманы табып та булмай.

⌘ **Өсөнсө дәлил.** Ниндәй генә шарттарҙа тотолһа ла, ит аҙыҡтары бер ваҡытта ла кеше сәләмәтлеге өсөн зарарлы матдәләрҙән һәм бысраҡлыҡтарҙан азат була алмай, сөнки йәнлектәрҙең дә, кешеләрҙән айырмалы рәүештә, матдәләр алмашыныуы үҙ яйы менән бара. Тарамыштарҙа һәм ҡан тамырҙарында һау һәм ҡәҙимге өлөшсәләр ҙә йәшәй, шулай уҡ улар буйлап эске ағзалар эшкәрткән һәм файҙаһы ҡалмаған, хатта ауырыуға әйләнгән өлөшсәләр тәндән сығыу юлдарына табан хәрәкәт итә. Йәнлектәрҙе көсләп үлтергән саҡта ағзаларҙан ҡан менән күпләп сығарыла торған барлыҡ зыянлы матдәләр һәм бысраҡлыҡтар үлектә тотҡарлана. Ә инде был зарарлы матдәләрҙе үлтерелгән йәнлек итенән сығара алырлыҡ башҡа юлдар ҙа, көстәр ҙә юҡ. Таҙалыҡҡа өндәүсе Муса бәйғәмбәр тарафынан салынған малдың ҡанын ағыҙырға ҡушылһа ла, быны менән генә ит таҙармай. Ҡан йыуан тамырҙарҙан ғына һарҡып төшә, ә нәҙек һәм ҡыл һымаҡ тамырҙарҙан тулыһынса ағып бөтмәй, сөнки йәшәү өсөн кәрәк булған йылылыҡ бөтөү менән, ҡан ойоша һәм иттә ҡатып ҡала. Әгәр ҙә етди генә уйлап ҡараһаң, тәбиғи юл менән үлгән йәнлектең ите әҙәм тарафынан ашар өсөн салынған малдыҡынан күпкә таҙараҡ. Үҙе йән биргән малдың итен ерәнеүҙән һәм зарарланыуҙан ҡурҡып, ашамайҙар, ә салынғандыҡында зарарлы матдәләр күп булһа ла ашайҙар.

⌘ **Дүртенсе дәлил.** Йәне ҡыйылған мал итенең күбеһен зыянлы тип иҫәпләп була. Сөнки кеше ит ашарға ғәҙәтләнгәне өсөн генә уларҙы яһалма һәм дөрөҫ булмаған юл менән үрсетә. Мәҫәлән: элек Тамбов өлкәһендәге ауылдарҙа һарыҡтарҙы күпләп үрсетер өсөн уларға көнөнә бер нисә тапҡыр араҡы эсергәндәр һәм аҡ икмәк ашатҡандар. Ғалимдар аңлатыуынса, унан башҡа ла хайуан һәм ҡоштарҙа бик күп зарарлы ауырыуҙар бар. Ә ул ауырыуҙар кешегә ауырыу ит аша еңел генә күсә. Быны уларҙың ҡайһы берҙәре: трихиноз, чума, сусҡа тифы, үпкә ауырыуы, карбункул, аяҡ һәм ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙары, рожа, туберкулез, һ.б.

⌘ **Бишенсе дәлил.** Вегетариандар ауырыуҙарға биреше бармай һәм уларҙы еңел үткәрә. Вегетарианлыҡ буйынса баҫҡандар араһында түбәндәге сирҙәрҙән ҡотолғандар бик күп (күбеһе хроник сирҙәр): подагра, ревматизм, ашҡаҙан ауырыуы, эс ҡатыу, паралич, үҫешеүсе күкрәк ауырыуҙары, һ. б. Ит аҙыҡтарынан баш тартыусылар араһында тормоштоң ҡәҙерен белеп, донъя мөғжизәләренә ҡыуанып йәшәүселәр бик күп. Ғөмүмән, был диета менән йәшәүселәр төрлө кимәлдәге бәхетһеҙлектәрҙе лә еңел кисерә, алған яраларҙан һәм хирургик операцияларҙан да тиҙ төҙәлә; унан тыш, итһеҙ диета башҡа дауалау ысулдары төҙәтә алмаған, төпкә киткән сей яраларҙы дауалай. Башҡа миҫалдар ҙа килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, филантроп Джон Говард, вегетариан булараҡ, лихорадка ҡоторған һәм үтә лә ныҡ бысранған һауалы торлаҡтарҙа һәм урындарҙа булып та үҙенең һаулығын һаҡлап ҡала алған.

⌘ **Алтынсы дәлил.** Табибтарҙың эскелек сәбәптәрен асыҡлау һәм уны дауалау буйынса үткәрелгән тикшереү-күҙәтеүҙәренә таянып, шуны әйтергә була: ауырыуҙар итте күберәк ашаған һайын, эскелеккә нығыраҡ ылыға, ә итте ашауҙы кәметкән һайын, эсеп иҫереү теләге лә кәмей. Ғалимдар раҫлауынса, эскелекте дауалауҙа күп осраҡта берҙән-бер юл булып тулыһынса вегетариан диетаһына күсеү тора.

⌘ **Етенсе дәлил.** Аллаһы Тәғәлә был донъяны яралтҡанда кешелеккә бойорған түбәндәге аманат шулай яңғырай: "Мин һеҙгә туҡланыр өсөн бөтә ерҙә лә үҫкән орлоҡтар һибеүсе үләндәрҙе һәм емештәре эсендә орлоҡтары булған ағас-ҡыуаҡлыҡтарҙы бирҙем". Бер ниндәй дини китаптарҙа ла, башҡа төрлө ғилми эштәрҙә лә хәҙерге заман кешеһенең анатомияһы үҙгәрештәр кисереп, Аллаһы Тәғәлә ебәргән аҙыҡтарҙан баш тартып, кеше тәбиғәтенә ят булған аҙыҡтарға күсеү кәрәклеген иҫбатлауҙар юҡ.

⌘ **Һигеҙенсе дәлил.** Дин һәм әхләҡ ҡанундары тарафынан ерҙәге боҙоҡлоҡтарҙың тамырында кешеләрҙең дөрөҫ туҡланмауы ята икәнлеге асыҡтан-асыҡ күрһәтелә. Кешелек был хаҡта уйланырға, туҡланыу өлкәһендә үҙенә ҡаты талаптар ҡуйырға тейеш. Ит ашарға яратыусыларҙы берәү ҙә боронғо йәшәү рәүешенә кире ҡайтырға саҡырмай, ә Аллаһы Тәғәләнең оло мөхәббәт менән һуғарылған тәғлимәттәренә тая-

*✓ Ер йөҙөндәге бөтә төр ауыр эш тик үлән ашаусы хайуандар, йәғни ат, үгеҙ, ишәк, фил һәм дөйә ярҙамында башҡарыла, бер ниндәй ит ашаусы хайуанда ла алһыҙ-ялһыҙ тир түккән аттағы һымаҡ түҙемлек юҡ.*



ныу яҡшы булыр ине, тип кенә иҫкәртелә.

⌘ **Туғыҙынсы дәлил.** Хайуандарға ыҙа-ғазаптар тыуҙырыуҙан, уларҙың ҡанын ҡойоуҙан йыраҡ торған вегетарианлыҡ кешеләрҙең уй-фекерен таҙарта, изгелек һәм игелеклелекте арттыра, йән тыныслығы өсөн дә файҙалы ул. Физик үҫешкә булышлыҡ итеү менән бер рәттән, ул шулай уҡ күңел нескәлектәрен дә камиллаштыра, аҡыл һәм аң кимәле үҫешенә лә килтерә. Кешелектең тәбиғи йәшәйеше өсөн кәрәк булған таҙа һәм саф сифаттар уның эштәрен дә таҙа һәм сафҡа әйләндерә.

⌘ **Унынсы дәлил.** Вегетариан диета кешене йәшерәк күрһәтә һәм күркәм йөҙлө итә. Адам Смит "Халыҡтар байлығы" исемле әҫәрендә Бөйөк Британия ерҙәрендәге иң матур ҡатын-ҡыҙ Ирландияның картуф менән туҡланған түбәнге синыфтары араһында, тип яҙа. Инжил китабына ингән изгеләр: Даниил, Анания, Мисаил һәм Азария йәшелсә менән генә туҡланып һәм таҙа һыу ғына эскән, шунлыҡтан батша өҫтәленән ашағандарға ҡарағанда улар күпкә матурыраҡ һәм тәндәре камилыраҡ булған.

⌘ **Ун беренсе дәлил.** Әгәр ҙә буш ятҡан ерҙәрҙең өстән бер өлөшөнә икмәк ашлыҡтары һәм ҡуҙаҡлылар, мәҫәлән, бойҙай, фасоль, һ.б. сәскәндә, икенсе бер өлөшөнә картуф, сөгөлдөр, шалҡан һәм башҡа тамыраҙыҡтар ултыртҡанда, ә ҡалған өлөшөн емеш-еләк баҡсалары үҫтереү, шулай уҡ беҙҙең мәнфәғәт өсөн кәрәк булған һөтмай, йөн биреүсе эре мөгөҙлө малдар, һарыҡ-кәзә көтөүлектәре өсөн биләһәк, иң бәләкәй дәүләттәр ҙә үҙ-үҙҙәрен хәҙергегә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ тәьмин итә алыр ине. Һәм, иң мөһиме, сит ил тауарҙарынан, йәғни иҡтисади һәм сәйәси бойондороҡлоҡтан азат булырҙар ине.

⌘ **Ун икенсе дәлил.** Ауыл халҡының төп шөғөлө ер эшкәртеү, иген, емеш-еләк һәм йәшелсә үҫтереү, көтөүлектәр тотоу булһа, ундай дәүләттең халҡы сәләмәт, ҡеүәтле, шат буласаҡ. Милләт сәскә атасаҡ һәм үҫәсәк.

⌘ **Ун өсөнсө дәлил.** Әгәр ҙә ит аҙыҡтарын ашау кәрәкмәй, тип табылһа, ҡыр хайуандарын эттәрҙән талатып, мылтыҡтарҙан атып, һунар ҡороу бөтә ерҙә лә яуызлыҡ тип иҫәпләнеп, оло тауыш ҡубыр ине. Ерҙәре әҙ булған илдәр ҙә һунарсылыҡҡа бүленгән ерҙәрен эшкәртеп, үҫемлектәр ултыртыр ине. Яңы эш урындары барлыҡҡа килер, аслыҡ кәмер һәм шуларға бәйле рәүештә, ерҙәге тормош хаҡы арзанайыр, фәҡирлек ҡырҡа кәмер ине.

⌘ **Ун дүртенсе дәлил.** Ауырлығының яртыһынан алып дүрттән өс өлөшө тирәһен һыу тәшкил иткән ит аҙыҡтары составында 14 процент һыу булған бойҙай, һоло һәм башҡа игендәр, чечевица, борсаҡ һәм башҡа ҡуҙаҡлыларҙан 3-4 тапҡырға ҡыйбатыраҡ. Йәшелсә ҡушылған итле аштар ҙа сыр, һөт һәм май ингән вегетариан аҙыҡтарынан 3-4 тапҡырға ҡыйбатҡа төшә. Сағыштырыуҙарҙан күренеүенсә, кеше сәләмәтлеге өсөн файҙаһы әҙ булған аҙыҡҡа күп аҡса сарыф итеү аҡылһыҙлыҡ ул.

⌘ **Ун бишенсе дәлил.** Йән ҡыйып ит ашау диетаһы менән йәшәгән ғаиләләргә осон-осҡа ялғап йәшәр өсөн тапҡан малдарын үтә һаҡ тотонорға һәм ныҡ түҙемле булырға кәрәк. Ә инде күпкә экономиялы вегетариан диетаһы тотһалар, улар күп кенә донъя мәшәҡәттәренән азат булырҙар, артып ҡалған килемдәрен йорттарын төҙөкләндереүгә, файҙалы китаптар һатып алыуға, теләгән ваҡытта сит яҡтарға сәйәхәт ҡылырға, үҙҙәренең эске донъяларын үҙгәртергә һәм тәбиғәт мөғжизәләрен өйрәнеүгә йүнәлтерҙәр ине.

⌘ **Ун алтынсы дәлил.** Бәләкәй балалар бешкән емешеләкте, он аҙыҡтарын иткә ҡарағанда нығыраҡ ярата һәм улар менән туҡланғанда яҡшыраҡ үҫә. Итте күп ашау балаларҙың һаулығына кире тәьҫир итә. Һис шикһеҙ, ата-әсәләренең инаныуы һәм өлгө көсө менән уратып алынмаһа, балалар үҙҙәре бер ваҡытта ла ит ашау ғәҙәтен үҙләштермәҫ ине, сөнки ул ғәҙәт тәбиғәткә ҡаршы килә. Шундай парадокс: ата-әсә, бер яҡтан, балаларында бөтә йәнле тәбиғәткә ҡарата һөйөү һәм барлыҡ йән эйәләренә ҡарата йәлләү һәм яратыу тойғоһо тәрбиәләргә ынтылһа, икенсе яҡтан, үҙ ҡылыҡфиғелдәре аша ҡорһаҡты тултырыр өсөн һуйылған малдың ғазаплы кисерештәрен кәрәкле һәм дөрөҫ, тип иҫбатлай.

⌘ **Ун етенсе дәлил.** Ерҙәге бөтә халыҡтар ҙа үҙҙәре үҙләштергән байлыҡ, ҡылған батырлыҡ һәм өлгәшкән еңеүе менән үлән утлаусы хайуандарҙың көсөнә, түҙемлегенә, батырлығына һәм уларҙың аңлы рәүештә эш башҡарыуына бурыслы. Ер йөҙөндәге бөтә төр ауыр эш тик үлән ашаусы хайуандар, йәғни ат, үгеҙ, ишәк, фил һәм дөйә ярҙамында башҡарыла, бер ниндәй ит ашаусы хайуанда ла таң һарыһынан ҡара кискә хәтлем алһыҙ-ялһыҙ тир түккән аттағы һымаҡ түҙемлек һәм ныҡышмалыҡ юҡ. Емеш-еләк һәм сәтләүектәр менән генә туҡланыусы горилла үҙен баҫтырып килеүсе һунарсының мылтығын тартып алып, көсәнмәй генә һындырып ташлаған. Натуралист доктор Дункан дәлилләүенсә, горилла үҙенең тәбиғи көсө менән Африка арыҫланынан да көслөрәк.

⌘ **Ун һигеҙенсе дәлил.** Вегетариан диетаһы тотоусылар кәүҙәгә эрерәк, күкрәк һәм беләк тарамыштары үҫешкән һәм көслөрәк, улар түҙемлерәк, һалҡын ҡанлылар. Улар көслө ихтыярлы, ауырлыҡтарға сыҙамлыраҡ, оло батырлыҡ ҡылырға әҙерҙәр. Профессор Форьесс итте күп ҡулланыусы инглиздәрҙе күбеһенсә бойҙай аштары, картуф һәм икмәк менән туҡланыусы шотланд һәм ирландтар менән сағыштырып ҡараған. Һуңғылар инглиздәрҙән буйға ла оҙонораҡ, кәүҙәгә лә ауырыраҡ һәм ҡеүәтлерәк булып сыҡҡан. Ит яратыусы лапландтар ваҡ ҡына халыҡ, ә уларҙың эргәһендә шул уҡ тәбиғи шарттарҙа йәшәүсе һәм күбеһенсә ер аҙыҡтары менән туҡланыусы финдар, шведтар һәм норвеждар эре һәм таҙа халыҡтар рәтенә инә.

⌘ **Ун туғыҙынсы дәлил.** Кешелек тарихында физик ҡеүәттәре һәм теләһә ниндәй ауырлыҡтарға сыҙамлығы буйынса башҡа халыҡтарҙан өҫтөн торған спартандар вегетариан булған. Үҙҙәренең иң бөйөк еңеүҙәре ваҡытында грек һәм рим һуғышсылары ла вегетариан юлын тотҡан, ә инде итле аҙыҡҡа күскәс, улар тиҙ арала ҡыйралыуға дусар ителгән. Шулай уҡ боронғо Грецияла беләк көсөнә таянып уҙғарылған халыҡ уйындарында ҡатнашыусылар һәм еңеүселәр вегетариан диетаһы тотоусылар. Ә аҙаҡҡа табан йәндәре ҡыйылған малдарҙың итен ашау киң таралғас, элекке бил бирмәҫ батырҙарҙың тәндәре йомшарып, ялҡау һәм көсһөҙгә әйләнгән.

⌘ **Егерменсе дәлил.** Донъяла яңынан-яңы юғары уйҙар тыуҙырыусылар һәм фәнни эштәр башҡарыусылар, тапалмаған фән юлынан барыусыларҙың күбеһе аңлы рәүештә вегетариан юлына баҫыусылар. Боронғонан алып хәҙергәсә улар араһынан ҡайһы бер даһиҙарҙы иҫкә алып үтеү ҙә етә. Бына улар: Гезиод, Будда, Пифагор, Эмпедокл, Платон, Овидий, Эпикур, Музмий, Сенек, Плутарх, Изге Яков, Тертулиан, Климент Александрийский, Порфирий, Златоуст, Император Юлиан Пруденций; ә инде һуңға табан: Корнаро, Сер Томас Мор, Монтень, Лессио, Гассенди, Бекон, Рей, Коулей, Эвелин, Мандевил, Мильтон, Боссюэт, Ньютон, Линеус, Томпсон, Поп, Доктор Экэ, Доктор Чайн, Доктор Кокки, Руссо, Вольтер, Честерфильд, Гартлей, Веслей, Говард, Сведенборг, Ритсон, Франклин, Бернарден де Сент-Шерр, Доктор Ламб, Доктор Гуфеланд, Шелли, Байрон, Филлипс, Бродертон, Алькот, Глейзе,Грехем, Ламартин, Мишле, Струве.

⌘ **Егерме беренсе дәлил.** Вегетарианлыҡ байлыҡ туплауға, тыйнаҡһыҙлыҡҡа һәм иманһыҙлыҡҡа ҡаршы булып сыға. Ул бер ғәйепһеҙ хайуандарҙың йәндәрен ҡыйып, нимәгәлер өлгәшеүҙәрҙе һис тә ҡабул итмәй. Вегетарианлыҡ фани донъяны яратырға өндәй, бөтәһенә лә ғәҙел ҡарарға саҡыра, тотанаҡлыҡҡа, һаҡсыллыҡҡа, ғәҙеллеккә, кешелеклеккә өйрәтә. Ә улар үҙ сиратында ирекле тормошта, тыныс һыйышып йәшәүгә һәм кешелек тоҡомоноң яҡшы холоҡ, ғөрөф-ғәҙәттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Емеш-еләк, үҫемлек һәм сәтләүектәр менән туҡланыусы горилланың һунарсы ҡулынан мылтығын тартып алып, һындыра һуғыуы осраҡлы ғына күренеш булмағандыр, тип уйланыла. Шул уҡ мылтыҡ менән кеше бит хайуандарға ғына түгел, үҙе һымаҡтарға ла ата, уларҙың да йәнен ҡыя. Ә бит ғалимдар иҫәпләүенсә, яуызлыҡ ергә кешенең башҡа йән эйәһенең ҡанын эскән, итен ашаған ваҡытында яралған...**

**Айҙар КҮСӘЕВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уңыш уңышты тыуҙыра

Беҙҙең йәмғиәт йыш ҡына уңышты матди байлыҡҡа, оҙаҡ йылдар эшләп табылған күп аҡсаға эйә булыуға бәйләй. Шуға ла уңыш - ул ниндәйҙер һуңлап килә торған бәхет, тип иҫәпләргә күнеккәнбеҙ. Әммә былдай ҡараш уңышҡа өлгәшеүгә ҡамасаулыҡ итеүе лә мөмкин. Уңыш тәжрибә талап итә, уңышлы кешеләр был тәжрибәне йәштән үк туплай. Музыкантҡа виртуоз булыр өсөн ныҡышмалы шөғөлләнергә кәрәк; атлет йондоҙ булғанға тиклем күп ваҡытын күнекмәләргә бағышлай. Тимәк, тормошта теләһә ниндәй уңышҡа ҡаҙаныу өсөн тәжрибә кәрәк.

Йыш ҡына беҙ үҙебеҙҙең тыумыштан бирелгән һәләттәребеҙҙе уңыш тип һанамайбыҙ. Беҙ: "Әгәр мин быны еңеллек менән башҡара алам икән, тимәк, был башҡаларҙың да ҡулынан киләләр. Миңә бирелгән һәләтлек, бүтәндәргә лә үтә ҡатмарлы һәләтлек була алмай," - тип фекер йөрөтәбеҙ. Был осраҡта беҙгә уңыштарыбыҙҙы атай-әсәйебеҙ, уҡытыусыларыбыҙ, етәкселәребеҙ, дуҫтарыбыҙ ауыҙынан раҫлатыу мөһим булып тора. Әгәр улар беҙгә: "Һин уңыш яуланың!" - тип әйтә икән, быға ихлас күңелдән "рәхмәт" менән яуап ҡайтар. Тағы ла ниндәйҙер һүҙҙәр әйтеп тороуҙың кәрәге юҡ. Ялған тыйнаҡлыҡ менән үҙеңә йәки эшеңә түбән баһа бирәһең икән, бының менән һиңә ҡарата әйтелгән маҡтау һүҙҙәрен юҡҡа сығараһың.

Әгәр был маҡтау һүҙе ниндәйҙер кимәлдә тәнҡиткә лә ишаралай икән, башлаған эшеңде ташлап ҡуйыу уйы ла тыуыуы ихтимал. Быңдай тойғоларға бирелмә. Күп кешеләр, бигерәк тә ғаилә ағзаларың, үҙҙәренең һинең һәләтеңде ни тиклем баһалауын һәм ярҙам күрһәтергә әҙер тороуын белдерә алмауы ла мөмкин. Хатта улар ихлас күңелдән һинең һәләттәреңдең тулыраҡ асылыуын теләһә лә, уларға быны һүҙ менән әйтеп биреүе ауыр булыуы ихтимал. Әгәр улар һинең хаталарыңды төҙәтеүгә ваҡыт сарыф итә икән, бының менән: "Һинең быны тағы ла яҡшыраҡ эшләйәсәгеңә мин ышанам һәм ярҙам иткем килә", тип әйтергә теләйҙәр.

